***✓Нисек инде улай? Беҙ тауҙар бейеклегенә, диңгеҙҙәрҙең зәңгәрлегенә һәм тәрәнлегенә, йылғаларҙың етеҙ ағышына, күктә йондоҙҙар атылғанына ҡарап һоҡланабыҙ һәм ғәжәпкә ҡалабыҙ. Ә бына иң бөйөк мөғжизәне - үҙебеҙҙе иҫәпкә лә алмайбыҙ. Тәбиғәттә иң ҙур мөғжизә - һин үҙең бит, Кеше! Үҙеңә ғәжәпләнеп баҡ һәм ҡәҙереңде бел!***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14 - 20 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№2 (472)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Хәҡиҡәт йән һаҡлар...**



3

**Башҡортса һөйләшәйек,**

йәки Уҡыусыларың бер-береһенә шундай саҡырыу ташлаймы?



6-7

**Мин даланан килдем ҡалаға...**

Ә йөрәгем йәшәй далала



8-9

**Ахырызаман ҡасан етә, тип...**

баш ҡатырып ултырмайыҡ!



12-13

14 ТВ-программа

## "КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙӘШ!

**Шулай итеп, гәзитебеҙҙең юбилей йылын башлап ебәрҙек бына. Тимәк, барыһы ла юбилейса булырға тейештер. Йәғни быйыл баҫманың түнәрәк кенә йәшенә арналған яңы рубрикалар асылыр, конкурстар ойошторолор - былары тураһында һуңыраҡ хәбәр итербеҙ. Әлбиттә, баҫмабыҙҙың тәүге аҙымдары, үткән юлы тураһында ла ниндәйҙер һүҙ-фекер әйтелергә тейештер. Беҙ, ғөмүмән, үҙ эшебеҙҙе уҡыусыларыбыҙ фекеренә, теләгенә яраштырып атҡара килдек бит. Артабан да шулай булыр. Уҡыусыларыбыҙҙың ихлас хаттарын да ҡабул итергә һәм гәзит биттәрендә бирергә әҙербеҙ. Булғас-булғас, байрамса булһын, әйҙә!**

# КҮҢЕЛЕ БИКЛЕЛӘРГӘ ЛӘ...

## үтеп инһен "Киске Өфө" нуры!

**Редакция урынлашҡан адресты байтаҡ эҙләп йөрөнөм. "Барыбер барам, барыбер күрәм "Киске Өфө"ләрҙе!" тигән маҡсат менән сығып киткәйнем бит Архангелдән. Шөкөр, моратыма өлгәштем. Күңелем юҡҡа тартылмаған икән һеҙгә - бик матур, йылы ҡаршыланығыҙ, бүләктәр бирҙегеҙ, ҙур рәхмәт үҙегеҙгә!**

Бүләк алырға тип бармағайным, әлбиттә, редакцияға - әйтер һүҙҙәрем бар ине. Халҡыбыҙ өсөн бик кәрәкле, фәһемле гәзит сығараһығыҙ, тигән һүҙҙәремде, рәхмәтемде үҙегеҙҙе күреп, үҙегеҙгә әйткем килде. Аҡыллыға - ишара, тигәндәй, ошоно аңлағандар алдыра, уҡый ҙа инде "Киске Өфө"нө. Күңеле биклеләргә лә үтеп инмәй ҡалмаҫ ул, иншалла, "Киске Өфө" нурҙары.

Мин үҙем бик яратып уҡыйым гәзитебеҙҙе. Бер мәҡәләне лә ҡалдырмайынса, яйлап, тәмләп уҡып сығам. Сираттағы һаны килеп еткәнсе шулай ваҡытты һуҙырға тырышам. Аҙна араһында районыбыҙҙың Аҙау ауылында йәшәгән һеҙҙең тағы бер уҡыусығыҙ - Хәмдиә Ғәлина менән телефондан хәбәрләшеп алабыҙ. Шылтыратыу менән ул: "Гөлнур, килдеме әле һиңә "Киске Өфө"нөң шул-шул һаны? Шунса биттәге шундай мәҡәләне уҡыныңмы?" - тип һорай һала ла, уҡығандары тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлаша ла башлай.

Бына бит, "Киске Өфө"нө уҡып, ситкә һалып ҡуйғандан һуң да унда яҙылғандар артабан да уйҙы биләй, күңелдәрҙә әллә күпме сәм, ғәм, фекер уятыуға сәбәп була. Рухты байыта, зауыҡты күтәрә. Күңелдәген тышҡа сығарғы, фекерҙәштәрең менән бүлешке килә. Үҙе бер мөғжизәле донъя ул "Киске Өфө"! Артабан да шулай дауам итһен эшегеҙ, тип теләйем. Яңы ижад үрҙәренә артылығыҙ, күңелдәргә нур өҫтәп торoғоҙ. Редакция коллективын һәм дә "Киске Өфө"нөң барлыҡ уҡыусыларын, тимәк, рухташтарым һәм фекерҙәштәремде башланып торған Яңы йыл менән ихлас ҡотлайым! Бергә булайыҡ, иҫән-имен йәшәйек!

**Гөлнур ХӨСНӨТДИНОВА.**
**Архангел районы**
**Әйтмәмбәт ауылы.**

## ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# ТАҒЫ БЕР ДӘЛИЛ...

## баш ҡаланың йәшен билдәләй



**Өфө-II ҡаласығы менән оҙаҡ йылдар ҡыҙыҡһынабыҙ, тикшерәбеҙ һәм һуңғы ун йыл эсендә яҙған хеҙмәттәребеҙҙә был ҡаласыҡ сағыштырмаса V-VI быуаттарҙа барлыҡҡа килгән, шул ваҡытта уға нигеҙ һалынған, тигән фекерҙе даими һығыҡ өҫтөнә ала килдек. "Киске Өфө" гәзите лә был хаҡта даими яҙҙы һәм тарих менән ҡыҙыҡһыныусыларға Өфө-II ҡаласығы буйынса эҙләнеүҙәребеҙ, табыштарыбыҙ, асыштарыбыҙ тураһында еткереп торҙо.**

Беҙҙең баш ҡалабыҙға кәмендә 1500 йыл тигән фекер бөтөн башҡорт донъяһына таралған. V быуатта ошонда табылған Византия императоры Феодосия Икенсенең рәсеме төшөрөлгән алтын аҡса быға бер дәлил булып тора. Был турала Рәсәй Фәндәр академияһы журналында 1830 йылда мәҡәлә лә донъя күрә. V-VI быуат башында Византияла ике император бер үк ваҡытта хакимлыҡ иткән. Уларҙың портреттары бар. Шуларҙың береһенең портреты баш ҡала биләмәһендә табылған алтын аҡсала һүрәтләнгән дә инде. Ғөмүмән, Өфө-II ҡаласығының хронологоғон билдәләүсе дәлилдәр күп ине. Ләкин улар көн һайын яңырып, өҫтәлеп торорға тейеш. Беҙ ҡаласыҡ урынында ҡаҙыныу эштәре алып барған саҡта 3-4 метрлыҡ культура ҡатламының иң аҫҡы өлөшөнән алынған тупраҡты Рәсәйҙең, донъяның төрлө физик-технологик лабораторияларына ебәреп, анализ үткәртеп, уның составын һәм ерҙә күпме йыл ятҡанын билдәләй инек. Тәүге шундай тәжрибәләр уңышһыҙыраҡ килеп сыҡты. Быйыл ул тупраҡты һәм ҡайһы бер башҡа табыштарҙы беҙ Австралияға ебәргәйнек. Сөнки беҙгә анализдарҙы төрлө илдәрҙә - Японияла, Англияла, Европа илдәрендә эшләйҙәр, ләкин иң юғары квалификациялы анализ Австралияла эшләнә, тинеләр.

**Ошо көндәрҙә Австралиянан шундай хәбәр килде: 3,5 метрлыҡ ҡалынлыҡтағы мәҙәни ҡатламдарҙың аҫҡы өлөшөнән алған бер проба анализы 570-се йыл, йәғни V-VI быуат менән билдәләнә.**

Бының менән шуны әйтмәксемен: Өфөнөң Кремленә нигеҙҙе V-VI быуатта һалғандар, тимәк, беҙҙең быға са йәшәп килгән фараздарыбыҙ дөрөҫ булды, табыштарыбыҙ - алтын аҡса, медальондар, биҙәүестәр, тиҫтәләгән, йөҙәрләгән башҡа табыштарҙың йәше лә V-VI быуат менән билдәләнә. Ә Австралиянан килгән хәбәр иң теүәл дәлил булып тора!

"Киске Өфө"нө алдырған, уҡыған уҡыусыларҙы ошо шатлыҡлы, ҡыуаныслы, һөйөнөслө яңылыҡ менән ҡотлайым!

**Нияз МӘЖИТОВ,**
**тарих фәндәре докторы,**
**профессор.**

**✓ Мин ошо Яңы йыл байрамдарын кәметеп, мәсәлән, май байрамдарын оҙайлыраҡ итеү яҡлы. Халыҡ тап шул саҡта ер, баҡса эштәре менән булыша, ҡала халҡы дачаларына ашыға.**



БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҠАЛАЛА БАР ОШОНДАЙҘАР ҘА...

**Гөлфиә Янбаеваның "Ауыл балалары инде беҙ..." тигән мәҡәләһендәге фекерҙе уҡығас, ҡалала тағы ла ҡыҙығыраҡ, сәйерерәк хәлдәргә тарыуың бар әле, тип, үҙем менән булған бер хәл тураһында яҙып һалырға булдым әле.**

Бер көндө урамда сумкамдың ҡаптырғысы ватылды. Йомош менән бер танышыма барырға сыҡҡайным, ҡабат боролоп торманым. Торорға уңайһыҙ булғас, сумкамды ҡултыҡ аҫтыма ҡыҫтырып алдым. Бына троллейбусҡа инеп, билет һатып алдым. Салонға ингәндән алып миңә тишкәнсе ҡарап, баштан-аяҡ тикшергән бер ҡатын янында ғына буш урын бар ине, ултырҙым шунда. Әллә был мине танымы, әллә берәй кәмселегем күренеп торамы, һәр хәлдә, ул миңә ниҙер әйтергә йыйына кеүек? Шулай уйлап, күршемә табаныраҡ башымды борҙом. Шул саҡ ҡатын троллейбустағы бөтәһе лә ишетелерлек итеп:

- Шундай матур тун, сифатлы баш кейеме кейеп алғанһың, ә сумкаңдың элэктергесе ватыҡ. Яңыһын һатып алырлыҡ рәтең юҡмы ни? - тине.

- Бөгөн генә ватылды әле ул...- тип аҡландым үҙем дә һиҙмәстән.

Шунан тәнҡитсемдең мыҫҡыллы йөҙө күҙемә салынып, уның һүҙҙәренең мине йәлләп йә теләктәшлек күрһәтеп түгел, ә ысынлап та мине ғәм халыҡ алдында мыҫҡыл итергә йә иһә үҙенең ниндәйҙер ҡанмаған үсен ҡандырырға теләүҙән әйтелгәнен аңлап ҡалдым. Шунан ҡатындың үҙенең өҫ-башына күҙ һалдым да:

- Ә бына һеҙ үҙегеҙ ҙә бик бай кейенмәгәнһегеҙ бит, ниңә улай башҡаларҙың кейемен, сумкаһын тикшерәһегеҙ әле? - тип ҡолағына шыбырҙаным. Бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп. Ҡатын ҡыҙып китмәһенме!

- Мин 50 йыл урам һепереүсе булып эшләнем, - тип теҙеп алып китте был.- Пенсиям да һәйбәт кенә сыҡты, ҡәнәғәтмен. Һинең кеүек ҡаптырғысы ватыҡ сумка тотоп йөрөмәйем, оятҡа ҡалып... - Тағы ла нимәләрҙер әйтте был, әммә мин тирә-яҡтағыларҙың ҡарашынан да, ҡатындың хаяһыҙлығынан да ныҡ ҡаушағайным, артабан ул әйткән һүҙҙәрҙең айышына төшөнмәнем. Шулай ҡыҫҡырып һөйләнә- һөйләнә бер туҡталышта төшөп ҡалды тәнҡитсем.

Әлбиттә, кемдәрҙеңдер күҙен ҡыҙҙырыр, нәфсеһен уятыр затлы түгел ине туным да, башыма кейгән баш кейемем дә. Күрәһең, был ҡатынға ғына улар шундай булып күренгәндер. Ул был кейемдәремдең пенсия аҡсаһына ла һатып алып була торған икәнен белһә, бәлки, өндәшмәҫ ине. "Ағас телле" тип атайҡмы икән был ханымды, әллә башҡалар уңышынан, матурлыҡтан көнләшеп интегеүсе типме? Ундай кешеләр ҙә осрай шул ҡалаларҙа. Ауылдарҙа бармы икән ундайҙар, белмәйем. Ниңләр, ауыл кешеләре ундай тупаҫлыҡтан азаттыр тип ышанғы килә...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Яңы йылдың тәүге көндәре эшһеҙлек менән үтә, шуның менән йыл дауамында эшһеҙлек кәйефе тыуҙырыла, тип уйламайһығыҙмы?*

***Иршат АҪЫЛҒУЖИН, "Стройтрейдинг" компанияһының генераль директоры:*** Ғөмүмән, мин оҙайлы байрамдарға кире ҡараштамын. Бындай ҡарарҙы ҡалала ғына йәшәгән, ауыл тормошон, ауыл хужалығына, ергә бәйле халыҡтарҙың менталитетын бөтөнләй аңламаған кешеләр генә ҡабул итеүе мөмкин. Хәйер, ауыл хужалығы эштәре өҙөнлөк иткән урындарҙа ғына түгел, башҡа ҡайһы бер өлкәләрҙә лә ял тигән төшөнсә бөтөнләй юҡ ул. Кемдер кинәнеп ял иткән ваҡытта, кемдер хеҙмәт вахтаһында булырға тейеш. Беҙ, йәғни минең компания хеҙмәткәрҙәре, ғинуарҙың бишендә үк эш башлайбыҙ, байрамды оҙаҡҡа һуҙмайбыҙ. Шуға мин ошо Яңы йыл байрамдарын кәметеп, мәсәлән, май байрамдарын оҙайлыраҡ итеү яҡлы. Халыҡ тап шул саҡта ер, баҡса эштәре менән булыша, ҡала халҡы дачаларына ашыға. Яҙғыһын байрамдар оҙайлыраҡ булһа, кешеләр эш менән баҡсаһы араһында өҙгөләнмәҫ, рәхәтләнеп эшен дә эшләр, әүҙем ял да итер, эшкә лә тыныс күңел, көр кәйеф менән сығыр ине, тип уйлайым.

***Йомабикә ИЛЬЯСОВА, "Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррире, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты:*** Оҙайлы ял көндәре бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар, әсәләр өсөн яҡшы, тип уйлайым, сөнки балаларының ҡышҡы каникулдарында уларҙы тәрбиәләп, тәмле аштар менән һыйлап, ваҡытын уларға күберәк бүлеү мөмкинлеге тыуа бит. Ҡатын-ҡыҙ тағы башҡа саҡта өлгөрә алмаған эштәренең осона сыға ошо байрамдарҙа. Ижад кешеләре уларҙы ижад өсөн файҙаланып ҡалырға тырыша. Унан һуң, барыбер ҙә эшкә сыҡһаң, эшкә егелһәң, шул эш үҙе һине йәк аты һымаҡ тартып алып китә, шуға күрә был ял көндәре генә йыл дауамындағы ялҡаулыҡҡа нигеҙ бирә тип уйламайым.

Шул уҡ эскән ир-ат, ҡатын-ҡыҙ өсөн был ял көндәре булды ни ҙә, булманы ни - улар өсөн былай ҙа көн дә байрам, көн дә ял. Кемдер ошо оҙайлы каникулдарҙы файҙалы итеп үткәрә белмәй икән, был һәр кемдең шәхси етешһеҙлеге, үҙ ғәйебе. Ҡыҫҡаһы, кемгәлер был көндәр эшһеҙлек көндәрелер, ә бәғзеләргә бик файҙалы мәл, шуға күрә дөйөм күҙлектән сығып фекер йөрөткәндә, ялдар һәйбәт һәм кәрәк, тип уйлайым.

***Юлай АҠСУЛПАНОВ, фермер, Стәрлебаш районы:*** Хужалыҡ атайымдың исеменә теркәлһә лә, беҙ бөтөн ғаилә, туғандар, барлығы тиҫтә самаһы кеше барыбыҙ ҙа үҙебеҙҙе фермерҙар тип йөрөтәбеҙ һәм бер-беребеҙ алдында ҙур яуаплылыҡ тоябыҙ. Шуға ла бер көн ял итәбеҙ икән, ниндәйҙер кимәлдә алға барыуыбыҙҙы тотҡарлайбыҙ, эшебеҙҙе туҡтатабыҙ, тиһәк тә була. Сөнки бөгөн эшләнергә тейеш эште иртәгәлеккә ҡалдырыу кире эҙемтәләргә килтереүе ихтимал. Мал өсөн дә, баҫыу-ҡыр өсөн дә, тимәк, ошо өлкәлә тир түккәндәр өсөн дә байрам юҡ. Ғөмүмән, ун көн буйы ял итеү һис башҡа һыймаған нәмә ул. Совет осоронда ғинуарҙың 3-өндә үк эшкә сыҡҡандар. Һәм был бик дөрөҫ. Ике көн ял итеп, байрам кәйефендә йөрөп алдың - шул еткән. Аҙна-ун көнгә һуҙылған "каникулдар" беҙҙең халыҡҡа кире йоғонто яһай, уны ялҡаулыҡҡа өйрәтә.

**З. ӘЙЛЕ яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Илеш районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**Гәзитебеҙҙең яңы йылдағы икенсе һанын ҡулығыҙға алдығыҙ бына. Әммә эргә-тирәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында теге йәки был сәбәп арҡаһында гәзиткә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар ҙа барҙыр. Бик ныҡ өҙгөләнеүселәрен дә, әллә ни иҫе китмәгәндәрен дә иҫкәртегеҙсе: 17 ғинуарға тиклем яҙылһалар, февралдән өйҙәренә тағы килә башлар "Киске Өфө".**

Гәзитебеҙҙе йыл да алдырған, уға ваҡытында яҙылған, уны аҙна һайын ҡәҙерле ҡунағылай көтөп алған тоғро уҡыусыларыбыҙ барлығын беләбеҙ һәм улар иғтибарына тағы шуны еткерәбеҙ: февраль-март айҙарында 2012 йылдың тәүге яртыһындағы хаҡтар менән 2012 йылдың икенсе яртыһы өсөн яҙылып буласаҡ.

**Һәм тағы.** Декабрҙә гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән 200-ләп уҡыусыбыҙға 2012 йыл өсөн "Башҡортса дини календарь" почта аша юлланды.

**Әйткәндәй**, почталар менән гәзиткә яҙҙырыу һәм гәзитте өйҙәргә килтереү буйынса аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итергә онотмағыҙ.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов рәйеслегендә боҙҙа мотоуҙыш буйынса шәхси донъя чемпионатының 2-се финалына әҙерлек һәм уны үткәреүгә арналған эш кәңәшмәһе үтте. Был сара ағымдағы йылдың 9-13 февралендә үтәсәк. Турнирҙа донъяның иң көслө 18 мотоуҙышсыһы ҡатнашасаҡ. Өфө этабында еңгән чемпионға ниндәй бүләк буласағы әле билдәле түгел, уның автомобиль булыуы ла ихтимал.

✓20-29 ғинуарҙа Берлинда 77-се "Йәшел аҙна - 2012" халыҡ-ара агросәнәғәт күргәҙмәһе үтәсәк. Халыҡ-ара форумда республиканың ике предприятиеһы үҙ продукцияһын тәҡдим итәсәк. Улар - "Башспирт" һәм Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге. Быына инде 16 йыл дауамында Рәсәй Берлин күргәҙмәһендә ҡатнаша. Рәсәй экспозицияларҙ ғәҙәттә 6000 квадрат метр майҙанлы айырым павильон биләй. Быйыл "Йәшел аҙна" халыҡ-ара күргәҙмәһендә 40 илдән рәсми делегациялар үҙ экспозицияларын тәҡдим итәсәк.

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың закон сығарыусылары муниципалитеттарға һәм тәбәк юл хужалығы идаралығына парковкалар, парковкалау урындары, шулай уҡ туҡталыу пункттары автомобиль хәрәкәтенә ҡамасауламаһын өсөн, уларҙы ҡайтанан рәткә һалыу буйынса бурыстар йөкмәтергә уйлай. Дөйөм ҡулланылыштағы юлдарҙа машиналарҙы парковкалау тәртибен боҙған һәм парковкаларҙы дөрөҫ ҡулланмаған өсөн граждандарға - 500 һумдан 2 мең һумға тиклем, вазифалы кешеләргә - 7-15 мең һум, юридик шәхестәргә 20-50 мең һум күләмдә административ штраф һалына.

✓Башҡортостанда уникаль тәбиғәт ландшафттарын һаҡлап ҡалыу һәм рекреацион ресурстарҙы һөҙөмтәле файҙаланыу маҡсатында дүрт тәбиғәт объекты һәм комплексы - республика әһәмиәтендәге тәбиғәт ҡомартҡыһы, ә улар биләгән территориялар айырым һаҡланған тәбиғәт биләмәләре тип иғлан ителде. Тәбиғәт ҡомартҡылары исемлегенә Ғафури районындағы мәмерйәләр, Мәләүез районындағы Ҡарағайлыҡ үҙәне һәм районындағы Озерки ауылы эргәһендәге Ҡарағайлыҡ, шулай уҡ Нуриман районындағы Билгеләр күле һәм һаҙлығы индерелде.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ХӘҠИҠӘТ ЙӘН ҺАҠЛАР...

**"Хәҡиҡәт йән һаҡлар..." әйтеменең күп нөктәләр менән билдәләнеп дауам ителер артабанғы өлөшөн логика үҫеше һәм өноҡшашлыҡ ҡануны буйынса "... ә ғәйбәт (ялғанлыҡ) тән һаҡлар" тип тамамларға ла булыр ине. Әгәр ҙә әйтемде ошо рәүешле ҡараһаҡ, уның, бер ҡарағанда, хәҡиҡәткә тоғролоҡ, намыҫлы йәшәү, итәғәтле, кеселекле-ололоҡло булыу кеүек үтә күренмәле аңлайышлы мәғәнәһенән тыш, тағы ла тәрәнгерәк һалынған йөкмәткеһен дә тоҫмаллай алабыҙ. Шуға күрә әйтемдең шул мәғәнәһе тураһында фекер йөрөтөп ҡарайыҡ. "Хәҡиҡәт йән һаҡлар..." әйтеменә һалынған оло мәғәнәне бер нисә йүнәлештә ҡарағанда ғына йөкмәткеһен тулыраҡ итеп күҙалларға мөмкин буласаҡ.**



## Күршең һуҡыр булһа…

Бер ауылда тормошо менән мәңге риза булмаған мыжыҡ бер кеше йәшәгән, ти. Ул һәр ваҡыт үҙенең бәхетһеҙлегенә, уңышһыҙлығына зарланып көн иткән. Ошо турала бахырланып һөйләүе менән ауылдаштарының да теңкәһенә тейеп, башын ҡатырған был бәләсник. Олоғайған һайын уның зар һүҙҙәре әсерәк һәм ағыулыраҡ була барған. Уның янында ауылдаштары хатта йылмайырға ла баҙнат итмәгән, уларҙың шатлығын мыжыҡ үҙен мыҫҡыллау тип ҡабул итеп, оторо ярһыр булған. Кем белә, бәлки, "Күршең һуҡыр булһа, бер күҙеңде ҡыҫып йөрө" тигән әйтем дә тап ошо бахыр кеше арҡаһында барлыҡҡа килгәндер.

Шулай итеп, был кеше йәшәй-йәшәй йөҙ йәшкә лә барып еткән, ти. Көндәрҙән бер көндө ауыл халҡын ғәжәпләндереп, мыжыҡтың һыңғай яҡҡа ҡырҡа үҙгәреүе, үҙен бәхетле итеп тоя башлауы, йөҙөнә бәхет ҡошо ҡуныуы хаҡында хәбәр таралмаһынмы! Тормошо менән мәңге риза булмаған был әҙәмде, әйтерһең дә, изге фәрештәләр уратып алған: ул күҙ менән ҡаш араһында ауылдың иң бәхетле кешеһенә әүерелгән дә ҡуйған. Ҡыҫҡаһы, ғүмере буйы йөҙәө һытыҡ кеше йөҙ йәшендә шатлыҡ атына атланған. Ауылдаштары был мөғжизәле хәлдең серен аңларға теләп, уның янына килгән һәм:

-Һинә нимә булды ул? - тип һораған.

-Бер нәмә лә булманы. Ғүмерем буйына бәхетле булырға теләнем, тик бәхет килмәне. Әле бына йөҙ йәшем тулғас ҡына бәхетһеҙ ҙә йәшәй алғанымды аңланым да, бәхетте эҙләүҙән баш тарттым. Шул саҡ, беләһегеҙме, ғәжәпләнеүемдән ултыра төштөм: баҡтиһәң, мин йөҙ йәшкә тиклем йәшәй алғас, донъялағы иң бәхетле кеше икәнмен дә. Тик был аңлауҙың йөҙ йыл үткәс кенә килеүе йәл, шуға үкенәм. Ғүмерҙең мәғәнәһе шунда: донъяла йәшәү, һулыш алыу - үҙе бәхет, был хәҡиҡәткә тин. Ошо хәҡиҡәт кешенең йәнен һаҡлай, - тип яуап биргән йөҙйәшәр бәхетле ҡарт.

Бында мәсьәләгә икенсе яҡтан да ҡарарға булалыр. Был кешегә ошо хәҡиҡәтте аңлар өсөн генә йөҙ йыл йәшәргә кәрәк булған икән, тимәк, Хоҙай уға шунсама ғүмерлек мөҙҙәт тә биргән. Әгәр ҙә бының өсөн илле йыл кәрәк булһа, уның ғүмере лә шунсамаға, тик илле йылға ғына һуҙылырға мөмкин ине бит. Хәҡиҡәттең йән һаҡлар асылын, бәлки, ошо рәүешле итеп тә аңларға булалыр. Ни өсөн тигәндә, үҙендә бер туктауһыҙ, йылдар буйына бәхетле итеп тойоп йәшәү аңды ла, ғәмде лә йоҡо хәленә килтереп, кешене бер ғәмһеҙ минрәү әҙәмгә әйләндерер ине бит. Кеше ғүмере буйына абсолют бәхетле була алмай, ғүмер бәхет мизгелдәренән генә тора, тигән аңлау ҙа ошоға бәйлелер, тим. Һүҙ юҡ, хәҡиҡәтҡа барып етеү ғүмеренден иң төп мәғәнәһенә, маҡсатына барып етеүгә тиң булғас, хәҡиҡәтте аңлау халәтендә йәшәү, бәлки, әүлиәләргә генә хас ғәмәлдер. Кем белә инде... Һәр хәлдә, йөҙ йәшкә еткәс кенә, ғүмеренең аҙағында ғына үҙенең бәхетле булыуын аңлаған кешенең тормошо ошо хәҡиҡәтте раҫлай төҫлө.

## Ҡағиҙәләр

Бер уйлаһаң, йәненде һаҡлар хәҡиҡәтте аңлар хәлгә барып еткәс кенә донъялыҡ менән хушлашыуың ҡалай үкенес. Әммә был хәҡиҡәтте әле йәш сағында уҡ аңлап, ғүмерҙең ҡәҙерен белеп йәшәүселәр ҙә бар, тип әйтер инем мин. Ундайҙарҙың күбеһенә был хәҡиҡәт ауыр фажиғәгә тарып йә ҡаты ауырып, үлем менән күҙмә-күҙ осрашҡандан йә мәрткә китеп уянғандан һуң асыла, тиҙәр. Улар дингә килә, күптәренең ғәҙәттән тыш күреү, тойоу, дауалау һәләттәре асыла. Тыуғандан алып ата-әсәһенен, олатай-өләсәһенен, ҡартатай-ҡартәсәһенең тәрбиәһе юҫығында ла йәнен һаҡлар хәҡиҡәтте аңлап үҫеүселәр бар. Әммә совет осоронда дини тәрбиә тыйылып, балалар атеистик мәктәптә белем алғанлыҡтан, тәрбиәнең ошондай иң дөрөҫ тип табылған ысулы бик һирәк ғаиләләрҙә генә осрай.

Һуңғы ваҡытта мәктәп программаһында дини тәрбиәгә иғтибар бирелеүгә бәйле тәүге аҙымдар яһала яһалыуға, әммә Рәсәй ысынбарлығында һәр бер башланғыста "табаға йәбешкән тәүге ҡоймаҡ" факторы урын ала шул. Шуға ла яңы предметтың концепцияһын әҙерләгәндә урындағы халыҡ әхлағы, тарихи йолалары һәм традициялары, халыҡ педагогикаһы принциптары был башланғысҡа нигеҙ булырға тейештер, тим. Төрлө диндәге күп һанлы милләт вәкилдәре йәшәгән Башҡортостан өсөн, мәҫәлән, тулыһынса мосолмандар йәшәгән Ислам дәүләттәренең дини мәктәптәре концепцияһы нигеҙ була алмай. Икенсеһе - тәбиғәт факторы, йәғни ҡыш - биш, йәй иһә өс айға һуҙылған һауа шарттарында тыуып үҫкән, тау-таш-урмандар араһында йәшәгән мосолман кешеһе менән йыл әйләнәһенә йәйҙә ғүмер иткәнө ныҡ айырылған кеүек, уларҙың донъяны ҡабул итеүе, тормош фәлсәфәһе лә төрлөсә. Беҙҙең милли фәлсәфә Ислам диненә тиклем үк формалашҡан. Шуға күрә "Урал батыр" эпосындағы игелек менән яуызлыҡ мөнәсәбәтенә бәйле донъяуи идея, Ислам дине килгәс, байытылған ғына, тип тә аңларға була. Бәлки, әлегә тиклем фәнни яҡтан өйрәнелмәгән башҡорт милли фәләсәфәһенең төп үҙенсәлеге ошо факторға бәйлелер ҙә? Һәр хәлдә, беҙҙең ғалимдар алдында аҡтарылмаған сиҙәм ята әле. Был сиҙәмде аҡтарыу "Башҡорт милли фәлсәфәһен" яҙыуға ла бәрәбәр булыр ине.

Йәнендә һаҡлар хәҡиҡәтте таныу, уға тоғро булыу - ул дөрөҫ итеп ғүмер һөрөү, иманлы йәшәү ҙә. Тик һинең дөрөҫ йәшәүең-йәшәмәүеңә баһаны кем ҡуйырға тейеш һуң? Үҙеңме? Мулламы? Ата-әсәйеңме? Аллаһы Тәғәләме? Беҙ күп кенә ғәмәлдәр башҡарабыҙ ҙа, Аллаға тапшырабыҙ һәм уның ғына хаҡ баһаһын көтәбеҙ. Әммә ғәмәл дәфтәренә яҙылып барған эштәребеҙҙең хаҡмы-түгелме икәнлеген донъялыҡ менән хушлашҡас ҡына аңлауыбыҙ үкенесле түгелме ни? Ул саҡта беҙ барыһын да аңлайбыҙ ҙа ул, тик ғүмер, тормош үлем һыҙығының теге яғында тороп ҡалған була бит. Шуның өсөн дә ғүмер эсендә хәҡиҡәткә тоғро ҡалыу, дөрөҫ йәшәү өсөн ҡағиҙәләргә таянып йәшәйбеҙҙер. Йылға үҙәнен билдәләгән бакендар кеүек ул ҡағиҙәләр. Улар булмаһа, тормош карабыңдың төбө ҡомға терәлеүен йә булмаһа, тулҡындарҙың һине ярға бәрғыһып киткәнен көт тә тор.

Атайымдың бер туған ағаһы Басир олатайым дөрөҫ йәшәүҙең ҡағиҙәләрен үҙенсә түбәндәгесә аңлата торғайны: "Дөрөҫ йәшәйем, тиһәң, кенә ҡыума, нәфсеңде тый һәм балаларыңдың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең шатланғанын күр". Был ҡағиҙәнең "кенә ҡыума", "нәфсеңде тый" тигән өлөштәре бер һүҙһеҙ аңлашыла. Ысынлап та, кенә ҡыуыу кеше күңелендә башҡаларға ҡарата дошманлыҡ тойғоһо тыуҙыра, дошманлыҡ - ыҙғышҡа, ҡайһы осраҡта ҡан ҡойошҡа алып килә. Нәфсеңдең ҡоло булып йәшәү иман, әхлаҡ төшөнсәләрен юҡҡа сығара. Ә инде балаларыңдың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең шатланғанын күреүҙә оло мәғәнә ята. Ҡайһы осраҡта балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрең шатлана һуң? Әлбиттә, улар һинең асылына тоғро булған осраҡта.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Яңы йыл каникулдарында БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы инспекторҙары һунарсылыҡ өлкәһендәге ҡануниәтте күҙәтеү буйынса рейдтар ойошторҙо. Рейд барышында 315 һунарсы тикшерелде. Һөҙөмтәлә 19 граждандың һунарсылыҡ ҡағиҙәләрен боҙоуы асыҡланды. Ике ҡоралай, ике мышы һәм алты ҡабандың рөхсәтһеҙ атып алыныуы асыҡланды. Хәтерегеҙгә төшөрәйек, ҡайһы бер хайуандарға һунар миҙгеле 31 декабрҙә үк тамамланды. 29 февралгә тиклем республикала төлкөгә, ҡуянға, бүрегә, урман этенә һәм тағы бер нисә затлы тиреле йәнлеккә генә һунар дауам итәсәк.

✓М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры, "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк сәйәси советы секретары урынбаҫары Раил Әсәҙуллин Башҡортостанда Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты координаторы итеп һайланды. Яңы вазифала ул алтынсы саҡырылыш Дәүләт Думаһына депутат итеп һайланған Александр Дегтяревты алмаштырҙы. Раил Әсәҙуллин Владимир Путиндың Өфөләге йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһен дә етәкләй.

✓Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев йәмәғәтселек иғтибарын Рәсәй тарихына һәм уның донъя кимәлендәге тарихи процестағы роленә йүнәлтеү өсөн 2012 йылды Рәсәй тарихы йылы тип иғлан итте, тип хәбәр итә Кремлдең матбуғат хеҙмәте.

✓Силәбе өлкәһенең Нязепетровск ҡалаһында "Родные просторы. Тыуған яҡ" гәзите сығарыла башланы. Дүрт битлек баҫма айына ике тапҡыр нәшер ителәсәк. Унда районда йәшәгән абруйлы башҡорт зыялыларының яҙмышы, башҡорттар тарихы һәм мәҙәниәте тураһындағы мәҡәләләр донъя күрәсәк. Редакция планында - балаларҙы башҡорт теленә өйрәтеү өсөн материалдар, милли аш-һыу өлгөләре баҫтырыу.

✓Башҡортостанда уртаса бер мәктәп компьютерына 18 уҡыусы тура килә. Республиканың 50-нән ашыу мәктәбендә, ғөмүмән, компьютерҙар юҡ. Һәр етенсе мәктәптә һыу менән тәьмин итеү системаһы санитар нормаларға тап килмәй, спорт залдары, медицина кабинеттары һәм ашханалар юҡ. Был мәғлүмәттәр Башҡортостан Республикаһы Контроль-иҫәп палатаһының йомғаҡлау ултырышында уҡып ишеттерелде.

✓ *Мәғариф министры Әлфис Суфиянов белдереүенсә, эшселәре 100 кешенән арткан ойошмаларҙа 1-2 процент эш урыны йәш белгестәргә ҡалырға тейеш. Был хаҡтағы закон проекты яҡын арала әҙерләнәсәк.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ӨҪТӘМӘ ТҮЛӘҮҘӘР АРТА

**2012 йылдың 1 ғинуарынан 123 меңдән ашыу эшләмәүсе пенсионерҙар пенсияларына федераль социаль өҫтәмә (ФСД) алыусылар булып иҫәпләнәсәк. Шуларҙың 29 меңенә ФСД түләп тәғәйенләнәсәк.**

Эшләмәүсе пенсионерҙарға өҫтәмә түләүҙең бындай төрө түләп 2010 йылдың 1 ғинуарынан тәғәйенләнә башлағайны. Социаль өҫтәмә күләме һәр пенсионерға төрлөсә, ул пенсия күләменә бәйле. Әгәр дөйөм пенсия күләме (төбәк өҫтәмәләрен дә ҡушып) билдәләнгән йәшәү минимумынан түбәнерәк булһа, социаль түләүҙәр ҡаралған.

2012 йылға Башҡортостан Республикаһында пенсияға социаль өҫтәмәне билдәләү өсөн 2011 йылдағы 4571 һум урынына 5220 һум күләмендә йәшәү минимумы билдәләнде.

Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса идараһы һы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, 2012 йылда республикала йәшәү минимумы күләменән кәмерәк пенсия алыусыларға ярҙам өсөн тотоноласаҡ сығымдар йәмғеһе 1,4 миллиард һум тәшкил итәсәк.

2012 йылдың 1 ғинуарынан Башҡортостан Республикаһының 2010-2011 йылдарҙа федераль социаль өҫтәмә билдәләнгән бөтә пенсионерҙарына ла йәшәү минимумының яңы күләменән сығып өҫтәмәне ҡайтанан иҫәпләп сығарыу автоматик рәүештә ғәмәлгә ашырыласаҡ.

Йәшәү минимумы күләме артыу менән бәйле федераль социаль өҫтәмәгә түләп түләү хоҡуғы барлыҡҡа килгән граждандар Рәсәй Пенсия фондының үҙҙәре йәшәгән урындарҙағы буйынса идаралығына ғариза менән мөрәжәғәт итергә тейеш. Шул саҡта федераль социаль өҫтәмә ғариза биргән ваҡыттан һуң килеүсе айҙың башынан тәғәйенләнәсәк.

## ОТЧЕТ БИРЕП ТОРМА

**2012 йылдың 1 ғинуарынан "Рәсәй Федерацияһының Пенсия фондына, РФ Социаль страховка фондына, Мотлаҡ медицина страховкаһы федераль фондына һәм мотлаҡ медицина страховкаһының урындарҙағы фондтарына страховка взностары тураһында" Федераль Законға төҙәтмәләр көсөнә инә.**

Физик шәхестәр файҙаһына түләүҙәр һәм башҡа аҡсалата бүләкләүҙәр башҡарғаны өсөн эшҡыуарҙар РСВ-2 отчеты биреүҙән азат ителә. Шулай итеп, 2011 йыл өсөн РСВ-2 төҙөп тапшырырға кәрәкмәй.

Шул уҡ ваҡытта Пенсия фонды хәтергә төшөрә: страховка взностарын тулы күләмдә түләү бурысы эшҡыуарҙар иңендә ҡала, 2011 йыл өсөн уның түләнеп бөтөү ваҡыты 2011 йылдың 31 декабре булды.

Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса идараһы һы Фоат Хантимеров һүҙҙәренә ҡарағанда, Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексә тарафынан страховкалар түләүселәр өсөн уңайлылыҡ маҡсаттарында "Эшҡыуарҙың шәхси кабинеты" программа комплексы эшләнде. Ул эшҡыуарҙарҙың эш урынынан йәки өйҙәге компьютерынан түләү документтарын Пенсия фондына әҙерләп тапшырыуға көйләнгән. Эшҡыуарҙарҙың шәхси кабинетына https://opfrrb.ru һылтанмаһы аша йәки Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса бүлексәһенең Интернет-битенән Пенсия фондының рәсми сайтына үҙенең ике реквизитын: Рәсәй Пенсия фондына теркәлеү номерын һәм ИНН һандарын йыйып эләгә ала.

**БР буйынса Пенсия фонды бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЮЛДАР...
## яңырыу юлында

**Былтыр башлыса Өфөнөң тарихи урамдарындағы юлдарҙы рәтләнәләр, быйыл ҡаланың төньяҡ өлөшөн яҡшыртасаҡтар. Черниковка биҫтәһендә 2012 йылда урамдарға асфальт түшәйәсәктәр һәм өс яңы юл бөгөлөшө төҙөйәсәктәр.**

Черниковка биҫтәһенең Интернациональ урамы Гастелло исемендәге стадион тапҡырындағы автомобиль юл үткәргесенә тиклем ремонтланасаҡ. Бынан тыш, Интернациональ урамынан алып "Автоваз" туҡталышына тиклем Вологодская урамы буйлап яңы асфальт юл һалынасаҡ. Шулай уҡ Ҡулса һәм Ульяновтар урамдары юл сатында ла ремонт эштәре күҙаллана.

Ҡала мэрияһы тағы ла бер яҡлы хәрәкәт булдырылғандан һуң тығындар күбәйгән Карл Маркс урамында автомобилдәр хәрәкәтен көйләргә уйлай. К.Маркс урамынан алып Аксаков урамы өлөшөндә Революцион урамын киңәйтеп, ике яҡлы хәрәкәт булдырыу планлаштырылған. Бының өсөн Революцион һәм Аксаков урамдары киҫелешендәге иҫке торлаҡ йортто емерергә тура киләсәк. Автомобилдәр Революцион урамына Аксаков урамы буйлап сығасаҡ.

Шулай уҡ киләһе йылдан башлап өс яңы юл бөгөлөшө: икеһе Чесноковка һәм Тимашево боролошонда, өсөнсөһө "Каменная переправа"ла төҙөлә башлаясаҡ. Дим биҫтәһендәге юл күперен төҙөп бөтөрөү ҙа планлаштырыла.

# ИҢ ТӘҮҘӘ ЙӘШ КЕШЕ...
## эшле булһын

**Республикала йәштәр араһындағы эшһеҙлекте бөтөрөү маҡсатында ойошмаларҙағы эш урындарының 2 процентын уҡыу йортон тамамлаусыларға бирергә вәғәҙә итәләр.**

Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, йыл да рсепубликала юғары уҡыу йортон тамамлаусыларҙың 5 проценты үҙенә эш урыны таба алмай. Эш тапҡандарҙың да күбеһе үҙ һөнәре буйынса урынлашмай, сөнки эш биреүселәр эш тәжрибәһе булыуын талап итә. Ә кисә генә студент эскәмйәһенән төшкән белгестең ниндәй эш тәжрибәһе булыуы хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкин? Был мәсьәләне хәл итеү маҡсатында республика власы тарафынан "Стартҡа хоҡуҡ" исемле проект әҙерләнгән. Проектҡа ярашлы, сығарылыш курс студенттары республика ойошмаларында стажировка үтергә мөмкин. Бөгөнгә көндә тәүгеләрҙән булып ӨДАТУ-нан 5 студент Президент Хакимиәтендә, тағы ла 10 кеше Башҡортостан Дәүләт Ҡоролтайында стажировка үтә.

Яҡын арала тағы ла 500 студент был акцияла ҡатнашып, үҙ бәхетен һынап ҡараясаҡ. Улар конкурс нигеҙендә һайлап алынасаҡ һәм һәр береһе менән 5-6 айлыҡ килешеү төҙөләсәк. Һүҙ, тәү сиратта, техник һәм сәнәғәт ойошмалары хаҡында бара, ләкин республикала гуманитар белем алған студенттар ҙа күп һәм уларҙы ла эш менән тәьмин итеү мөһим.

Мәғариф министры Әлфис Суфиянов белдереүенсә, эшселәре 100 кешенән арткан ойошмаларҙа 1-2 процент эш урыны йәш белгестәргә ҡалырға тейеш. Был хаҡтағы закон проекты яҡын арала әҙерләнәсәк.

Шулай уҡ йәш белгестәрҙе бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа йәлеп итергә лә вәғәҙә бирәләр. Үҙ эшен асырға ҡыйыулыҡ иткән кисәге студенттарға Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты субсидия бирәсәк. Проекттың дүртенсе йүнәлеше - студенттар үҙҙәре уҡыған уҡыу йорто янындағы бәләкәй инновацион ойошмалар эшендә ҡатнаша ала. Бөгөнгә көндә Башҡортостанда ошондай 16 ойошма бар, унда студенттар һәм йәш ғалимдар ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара.

# УҠЫУ ЙОРТОНОҢ ЕҢЕҮЕ...
## миллиондар килтерәсәк

**Башҡорт дәүләт университеты РФ Мәғариф һәм фән министрлығының юғары һөнәри белем биреүсе дәүләт мәғариф учреждениеларын стратегик үҫтереү программаларына ярҙам итеү конкурсында беренсе урын яуланы. Ул илдең башҡа 20 вузы менән бер тиң һөҙөмтә күрһәтеп, "Классик университеттар" номинацияһы еңеүсеһе булды. БДУ алдағы өс йыл дауамында федераль бюджеттан 100 миллион һумға тиклем аҡса аласаҡ.**

Әйткәндәй, БДУ төбәктәге конкурста еңгән берҙән-бер вуз. Университет ректоры Әхәт Мостафин әйтеүенсә, вузды үҫтереү буйынса комплекслы программа 2020 йылға тиклемгә ваҡытҡа иҫәпләнгән һәм профориентацион эштән алып матди-техник базаны һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә тиклем ете йүнәлеште үҙ эсенә ала. Мәҫәлән, белем биреү процессын камиллаштырыу маҡсатында республика мәктәптәре менән эшләүҙе әүҙемләштереүҙән тыш, университет ҡарамағында һәләтле балалар өсөн мәктәп-интернат ойоштороу планлаштырыла. Программаны әҙерләүселәр фекеренсә, унда уҡыған балалар алдынғы студенттарға әйләнәсәк һәм белем кимәле буйынса башҡа студенттарға үрнәк буласаҡ. Бынан тыш, дистанцион белем биреү технологиялары, хатта мәктәп эскәмйәһенән башлап ситтән тороп уҡытыу күҙ уңында тотола.

Фән һәм инновацион эшмәкәрлек өлкәһендә Башҡорт дәүләт университетында нанотехника һәм нанофизика, йыһан технологиялары (ГЛОНАСС системаһын үҫтереү буйынса), биотехнологиялар һәм генетика, шәркиәт буйынса махсуслашҡан фәнни-инновацион үҙәктәр ойоштороуға баҫым яһаласаҡ. Вузҙың бындай структураларҙы ойоштороу буйынса тәжрибәһе бар (БДУ-ла бер нисә фәнни үҙәк эшләй). Ғилми тикшеренеүҙәр үткәреү өсөн өр-яңы ҡоралдар һатып алыу ҙа ҡаралған. Программа йәнә университеттың Туҡай урамындағы корпусын, Сибайҙағы уҡыу биналарын реконструкциялауҙы, Өфөлә һәм Нефтекамала яңы ятаҡтар, фәнни китапхана өсөн айырым корпус төҙөлөшөн дә үҙ эсенә ала.

Әхәт Мостафин әйтеүенсә, конкурста еңеү - университет үҫеше өсөн бик шәп этәргес, сөнки бихисап етди мәсьәләләрҙе вуздар үҙаллы, дәүләттең финанс ярҙамынан тыш хәл итә алмай. "Стратегик үҫтереү комплекслы программаһын тормошҡа ашырыу Башҡорт дәүләт университетындағы ғилми тикшеренеүҙәрҙе яңы кимәлгә күтәрергә һәм белем биреү сифатын арттырырға ярҙам итәсәк", - тип иҫәпләй ректор.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡорт дәүләт университетының икенсе курс студенты, Өфөнөң 23-сө балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбенең спортсы-инструкторы Айнур Шәйбәков Польшаның Минск-Мазовецкий ҡалаһында үткән юниорҙар араһында халыҡ-ара шашка буйынса донъя беренселегендә еңеү яуланы.

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, Башҡортостанда халыҡтың финанс белемен арттырыу буйынса экспертар төркөмө әҙерләнә. Эксперттар алдында халыҡтың финанс белем кимәлен системалы арттырыу методикаһын әҙерләү, шулай уҡ программаны тормошҡа ашырыусылар эшмәкәрлеген күҙәтеү бурысы тора. Эксперттар төркөмө составына Башҡортостан Республикаһының Финанстар министрлығы, Милли банкы, ғилми йәмғәтселек вәкилдәре, финанс һәм фонд баҙарҙарында ҡатнашыусылар инәсәк.

✓2012 йылда балалар баҡсалары төҙөү Башҡортостандың власть органдары эшмәкәрлегендәге социаль сәйәсәттең өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе буласаҡ. Төбәк райондары һәм ҡалаларында йәмғеһе 52 яңы балалар баҡсаһы, шул иҫәптән Өфөлә ете балалар баҡсаһы төҙөләсәк. Яңы мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары 7,5 мең баланы ҡабул итә аласаҡ.

✓Статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостанда һуңғы биш йылда тыуым йылына 42 меңдән 55 меңгә тиклем артҡан. Төбәктә тыуым артыуы яңы, заманса бала табыу йорттарын һәм дауаханаларҙың акушер-гинекология бүлексәләрен төҙөүҙе талап итә. Республика Хөкүмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 2012 йылда Башҡортостанда Өфөләге Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының 120 койка-урынлыҡ акушер-гинекология корпусын, шулай уҡ Октябрьский ҡалаһындағы ҡала клиник дауаханаһының 80 койка-урынлыҡ бала табыу йортон төҙөү дауам ителәсәк.

✓Өфөлә үткән яңы йылдағы беренсе вакансиялар йәрминкәһендә баш ҡала предприятиелары һәм ойошмалары 330-ҙан ашыу эш урыны тәҡдим итте. Йәрминкәгә килеүселәрҙең иҫәбе иһә 700-гә етте. Уларҙың 120-һе эш биреүселәр менән әңгәмә үтте һәм яртыһы тиерлек эшкә урынлашыуға саҡырыу алды. Иҫәп буйынса икенсе вакансиялар йәрминкәһе Өфөлә киләһе кесаҙна, 19 ғинуарҙа, үткәреләсәк.

***✓ Иң тәүҙә хәлде торороҡһоҙландырыуға булышлыҡ итергә кәрәкмәй. Шуны онотмайыҡ: ошо нигеҙҙә - илде тарҡатыу маҡсатында - күптәр заказ буйынса эшләй һәм уның өсөн һәр төрлө гранттар ала.***



*ЙЫЛДЫ ОҘАТҠАНДА*

# КИЛӘСӘК ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ҠУЛДАМЫ?

**Оло йортта ни булһа...**

**"... Тәүҙә бит беҙгә 90-сы йылдарҙа емертелгәнде аяҡҡа баҫтырырға, унан бурыстарҙан ҡотолорға кәрәк ине, шунан һуң ғына ниндәйҙер резерв тупларға мөмкинлек тыуҙы", - тигәйне билдәле актер һәм режиссер, ә бөгөнгө көндә - В. Путиндың һайлау алды штабы етәксеһе Станислав Говорухин "Илдең киләсәген ниндәй итеп күрәһегеҙ?" тигән һорауға яуап итеп.**

Эйе, илдең киләсәге уның үткәнендә асыҡ күренә, сөнки уға нигеҙ тап ошо үткән йылдарҙа һалына ла инде. Әлбиттә, Говорухиндың заманында илде шаулатҡан "Былай йәшәргә ярамай" фильмында күрһәтелгәндәрҙе фәҡәт бөгөн йә иртәгә генә төҙәтеп булмаясаҡ ине, ләкин яҡын үткәндәге йылдарҙа әкренләп булһа ла йәмғиәтебеҙ ҡоролошон үҙгәртеп ҡороуға табан ыңғай аҙымдар яһалыуын инҡар итеү ҙә мөмкин түгел.

С. Говорухин әйтеп киткән әлеге резервтың ҡайһы бер күрһәткестәре тураһында йыл аҙағында халыҡ менән уныңсы тапҡыр "тура бәйләнеш"кә сығып, асыҡтан-асыҡ аралашҡан мәлендә РФ Хөкүмәте Премьер-министры Владимир Путин тарафынан да телгә алынды. Социаль сәйәсәт, халыҡтың тормош сифаты тураһындағы һорауҙарға яуаптарҙа ошондай һандар яңғыраны:

- 2000 йылда, "рәсәйсә үлсәм" менән әйткәндә, фәҡирлек сигендә көн күреүселәр халыҡтың 29 процентын тәшкил иткән булһа, бөгөн был күрһәткес 12,5 процент;

- уртаса эш хаҡы 23 400 һум тәшкил итә, йыл эсендә 2,9 процент үҫешкә өлгәшелде;

- медицинаны ҡайтанан "ҡоралландырыу"ға өҫтәмә рәүештә 460 миллиард һум бүленә;

- 2011 йыл йомғаҡтары буйынса уртаса пенсия күләме 8350 һум тәшкил итә.

Йәмәғәтселек фекерен өйрәнеүсе Бөтә Рәсәй үҙәге рәсәйлеләрҙең 2011 йылды ниндәй кәйеф менән оҙатыуы, яңы-һын ниндәй уй-пландар менән ҡаршылауы хаҡындағы мәғлүмәттәрен беҙҙең иғтибарға еткерә. Рәсәйлеләрҙең өстән бер өлөшө (34%) үтеп барған йылды оҙатып, яңы йылды күтәренке рухта ҡаршылауы хаҡында белдергә. Респонденттарҙың яртыһы (50%) күтәренкелек тә, кире тойғолар ҙа кисермәй, ә 10 процент кеше пессимизм тотҡоно булыуын белдерә. Рәсәйлеләр киләсәккә позитив ҡарашта һәм уны өмөттәр бағлап ҡаршылай: респонденттарҙың 65 проценты 2012 йылдың үҙҙәре өсөн уңышлы буласағына өмөт итә.

Уҙған йылдың донъя күләмендәге иң төп ваҡиғалары тип рәсәйлеләр Ливиялағы боларыштарҙы, Японияның "Фукусима" АЭС-ындағы һәләкәтте атай. Шул уҡ ваҡытта донъя күләмендәге һәм еврозоналағы кризис, ғәрәп инҡилабы һәм, әлбиттә, РФ Дәүләт Думаһына һайлауҙар иң мөһим ваҡиғалар иҫәбендә.

2011 йыл шулай уҡ илебеҙҙең Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына (ВТО) инеүе, Ярославлдәге авиаһәләкәттә "Локомотив" командаһының һәләк булыуы йылы булараҡ та рәсәйлеләр хәтерендә һаҡланасаҡ.

Йыл аҙағында Росстат былтырғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәрен баҫып сығарҙы. Унан да алдағы (2002 йылғы) халыҡ иҫәбен алыу ваҡытынан бирле илебеҙ 2,3 миллион халҡын юғалтҡан. Айырыуса ауылдарҙа кеше кәмей. Был ауыл халҡының уртаса ғүмер оҙайлығы кәмерәк булыуы менән генә аңлатылмай. Халыҡ ҡаса ауылдан! Бына фажиғә ҡайҙа... Ауыл халҡының күпләп мегаполистарға күсенеүен ҡайһы бер белгестәр тәбиғи миграция законы тип аңлатырға тырышһа ла, ысынында иһә был йәшәйештең, тәбиғәттең асылына ҡаршы күренеш. Ябай ғына уңайлыҡтар булдырылһа, торбаларҙан зәңгәр яғыулыҡ килеп, таҡыр юлдарҙан автобус маршруттары гөрләп торһа, сифатлы белем һәм тәрбиә биреү, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары эшләһә, бындай ерҙәрҙә берәү ҙә ташлап китмәҫ ине, әлбиттә. Бына ҡайҙа кәрәк сит ил миҫалын өлгө итеп алыу! Европа илдәрендә һәм АҠШ-та аҙ һанлы халыҡ йәшәгән бәләкәй пункттарҙа уңайлы шарттар булдырыу һәм төҙөкләндереүгә ныҡ иғтибар бирелә. Хатта ки Белоруссияла ла, мәҫәлән, 10 кеше йәшәгән ауылдарға ла автобустар йөрөп тора.

**...кесеһендә лә шул булыр**

Башҡортостан Республикаһының социаль-иҡтисади үҫеше алдағы ҡуҙаллауҙарға ярашлы һәҙәмтәләргә килтерҙе. Ә улар, иншалла, йөҙ ҡыҙарырлыҡ түгел. Был иң тәүҙә йән башына төбәк продукты үҫеше менән характерлана. Был күрһәткес 2011 йыл ахырына 109 процент тәшкил итте. Донъя иҡтисади өлкәһендәге билдәһеҙлек шарттарында был ярайһы ғына тотороҡлолоҡ билдәһе тип әйтергә була. Иҡтисади үҫештең төп этәргесе, әлбиттә, сәнәғәт етештереүе. Үткән йылдың 11 айында сәнәғәт етештереүе индексы 109,7 процент кимәленә етте, был уртаса Рәсәй күрһәткесенән юғарыраҡ.

Агросәнәғәт комплексында ҡуҙәтелгән ыңғай йүнәлештәр һөйөндөрә. 2011 йылда иген уңышы 3,2 миллион тонна (гектарынан уртаса 21 центнер), шәкәр сөгөлдөрө - 1,4 миллион, майлы культуралар 300 мең тоннанан ашыу тәшкил итте. 2011 йылда үҫтерелгән ауыл хужалығы продукцияһы күләме 2010 йылғы кимәлдән 4 тапҡырға юғарыраҡ булды.

Ҡайһы бер социаль күрһәткестәргә туҡталып, рәсми сығанаҡтар иң тәүҙә эш хаҡының артыуын билдәләй. Халыҡтың йән башына аҡса килеме 8,4 процентҡа артты. Хеҙмәт баҙарында яҡшы яҡҡа үҙгәреш һиҙелә. Рәсми рәүештә теркәлгән эшһеҙҙәр һаны кәмей бара. Республикабыҙҙа бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү йүнәлештәренә айырым иғтибар бирелә.

Бынан тыш, республикабыҙ инвестициялар йәлеп итеү буйынса Рәсәй төбәктәре рейтингыһында беренсе урынды яуланы. Был да күңелгә йылылыҡ өҫтәүсе йыл билдәһе.

Проблемалар ҙа күп, әлбиттә, ләкин был байҡауҙа аңлы рәүештә улар телгә алынманы, ә бәләкәй генә булһа ла позитив башланғыстарға баҫым яһалды. Икенсенән, проблемаларҙы урамға сығып, боларыштар ойоштороу, йөҙроҡ болғап митингылар үткәреү юлы менән генә хәл итеп булмай шул... Әлбиттә, илдәге хәл-ваҡиғалар менән ризаһыҙҙар үҙ фекерҙәрен белдерергә хоҡуҡлы, һәм уларҙың тауыштары, талаптары власть тарафынан ишетелмәй ҡалмаҫ, тейешле һығымталар яһалыр, тигән өмөттә булайыҡ. Тағы ла әлеге шул абруйлы шәхестәребеҙ фекеренә таянырға тура килә: "Беҙ йыш ҡына "власть эшләргә тейеш", "власть бурыслы", "власть эшләп еткермәй" тип ҡабатларға яратабыҙ, - ти Станислав Говорухин. - Шул уҡ ваҡытта йәмғиәтебеҙҙе үҙгәртеп ҡороуҙа беҙ үҙебеҙ ҙә ҡатнашырға тейешлекте онотабыҙ. Иң тәүҙә хәлде торороҡһоҙландырыуға булышлыҡ итергә кәрәкмәй. Шуны онотмайыҡ: ошо нигеҙҙә - илде тарҡатыу маҡсатында - күптәр заказ буйынса эшләй һәм уның өсөн һәр төрлө гранттар ала".

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*ИҪӘПЛӘҮ ЙОМҒАҠТАРЫ*

# АУЫЛ ХАЛҠЫ АРТҠАН...

**Рәсәйҙә 2010 йылда булған халыҡ иҫәбен алыуҙың тәүге һөҙөмтәләренә йомғаҡ яһалды. 2002 йылдағы иҫәп алыу мәғлүмәттәре менән сағыштырғанда республика халҡы 32 мең кешегә кәмегән.**

■ Һуңғы 8 йылда ауылда йәшәүселәр һаны күпкә артҡан: әгәр ҙә Рәсәй буйынса ауылдан ҡалаға күсеү күренештәре күберәк булһа, Башҡортостанда, киреһенсә, ҡала халҡы 165 мең 100 кешегә кәмегән (64 проценттан 60,4 процентҡа тиклем). Әгәр ҙә 2002 йылда республика ҡалаларында 2 миллион 626 мең 600 кеше йәшәһә, һуңғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса - 2 миллион 462 мең 500 кеше. Статистика органдары белдереүенсә, был факт демографик күрһәткестәрҙең кәмеүенә түгел, ә ябай "административ" сәбәпкә бәйле, йәғни 40-лаған ҡала тибындағы ауыл үҙенең статусын үҙгәртеп, ябай ауыл булып ҡалған.

■ Ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр нисбәтенеҙ үҙгәрмәгән: гүзәл зат, элеккесә, күпселекте тәшкил итә. Республикала 53,2 процент (2 миллион 166 мең 100) ҡатын-ҡыҙ йәшәй. Ир-егеттәр һаны 0,1 процентҡа арттан һәм 46,8 процент тәшкил итә.

■ Бөтә Рәсәйгә хас тенденциялар Башҡортостанды ла урап үтмәгән. Мәҫәлән, республикала законлы никахта булған ғаиләләр һаны кәмегән, ә граждандыҡ никахында йәшәүселәр һаны артҡан. 2002 йылда рәсми никахта булыусылар ир-егеттәр араһында 60 процент, ә ҡатын-ҡыҙҙар араһында 50 процентты тәшкил итһә, 2010 йылға был һан, ярашлы рәүештә, 56 һәм 48 процентҡа төшкән. 8 йыл элек 6 процент ир-егет һәм 5 процент ҡатын-ҡыҙ граждандыҡ никахында йәшәһә, һуңғы иҫәп алыу күрһәтеүенсә, был һан, ярашлы рәүештә, 8 һәм 6,8 процентҡа артҡан. Кәләш алмаған һәм кейәүгә сыҡмағандар, шулай уҡ айырылышҡандар һаны үҙгәрмәгән тиерлек. 2002 йылдағы кеүек үк тол ҡалыусы ҡатын-ҡыҙҙар һаны (18,3 процент) тол ирҙәргә (3,2 процент) ҡарағанда күберәк.

■ Республика халҡы белем алыуға иғтибарын арттырған. Әгәр ҙә 2002 йылда юғары белемлеләр бары тик 11 процент ҡына тәшкил итһә, 2010 йылға был һан 17 процентҡа еткән. Урта махсус белемгә эйә булыусылар һаны, киреһенсә, кәмегән һәм 42,9 процент тәшкил итә (2002 йылда - 46,6 процент). Әгәр ҙә 2002 йылда мәктәптә бөтөнләй уҡымағандар һаны бер проценттан артығыраҡ булһа, 2010 йылға иһә был һан 0,6 процентҡа тиклем кәмегән.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

**Ауыҙ эсе боҙолғанда**



❖ болан мөгөҙөн (кешеләрҙең өйҙәрендә эленеп тә тора ул) яндырып, 10 процентлы һеркәлә бешерергә, һары май менән болғатырға. Шул майҙы ауыҙ боҙолғанда һөртергә. Май ҡул-аяҡ ярылғанда ла ярҙам итә;

❖ баҡыр купоросын төйөп, теш урттарына һылаһаң, уртты нығыта, тик ауыҙҙы аҙаҡ ныҡлап йыуырға;

❖ тел ҡытыршы булғанда тауыҡтың эс майын ауыҙҙа тоторға.

**Депрессиянан ҡотолам, тиһәң...**

Эс бошҡанда кәйефте күтәреү өсөн әстерхан сәтләүегеен (грек сәтләүеге) төйөп, шундай күләмдә бал ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашарға.

**Күмер ҙә дауа**

Ағас күмере иремәй, 24-28 сәғәттән организмдан сығып бөтә. Күмер, бигерәк тә ҡайын күмере холестеринды кәмөтә, һимеҙҙәрҙе бер аҙ ябыктыра, полиартрит, ишемия менән интегеүселәрҙең хәлен яҡшырта, үт ҡыуығына, бөйөргә таш ултырыуҙан ҡотҡара, шулай уҡ ағыуланғанда, эстә газ йыйылғанда ла файҙалы.

Күмерҙе ике аҙна буйы көнөнә 3 тапҡыр (ашағандан һуң бер сәғәт үткәс) бер юлы 3-5 таблетка эсергә. Аптека күмере булмаһа, ҡайын күмерен төйөп, көнөнә 3 тапҡыр һыу менән 1-әр балғалаҡлап эсергә.

**Дөгө**

Дөгөләгә Е төркөмө витаминдары ваҡытынан алда ҡартайыуҙан һаҡлай, ҡан баҫымы күтәрелеүгә, ишемияға ҡаршы тора, организмдан артыҡ шыйыҡлыҡты ла сығарырға һәләтле.

**Шыршы**

Шыршы энәләре шлактан яҡшы таҙарта. Дауа өсөн Яңы йыл байрамына ҡуйған шыршығыҙҙы киптереп алырға ғәҙәтләнергә кәрәк. 2-3 ҡалаҡ ваҡланған ылыҫты ярты литр ҡайнар һыуға һалып, 10 минут бешерегеҙ, 12 сәғәт йылы урында төнәтегеҙ. Һөҙөп, термоска ҡойоғоҙ һәм көнө буйы сәй урынына эсегеҙ. Был төнәтмә организмды, бигерәк тә эсәктәрҙе шлактан таҙарта. Кесе ярау үтә күренмәле булғансы, дауаны дауам итегеҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Тәрбиәле әсә үҙ балаларына ғына әсә булмайынса, бәлки, мосолмандарҙың барыһына ла хөрмәтле әсә булыр. Уларҙың баһаһы яҙып, тел менән һөйләп бөтәрлөк түгелдәр.*






# ЯҠШЫ ӘСӘ...
## ата абруйын күтәрер

**Барса кешеләрҙе донъяға килтереүселәр - әсәләрҙер, быны үҙегеҙ ҙә асыҡ beләһегеҙ. Ләкин был кешеләрҙән ҡайһыһы - уҫал, ҡайһыһы - яҡшы, ҡайһыһы - әҙәпле, ҡайһыһы - әҙәпһеҙ, ҡайһыһы - белеүсе, ҡайһыһы белемһеҙ булып тыуа, сөнки уларҙың шулай булыуында әсәләрҙең ҡатнашлығы бар.**

Тәрбиәле әсәләрҙең балалары күп ваҡытта яҡшы тәрбиәле була. Боҙоҡ һәм тәрбиәһеҙ әсәләрҙең балалары күп осраҡта уҫал һәм тәрбиәһеҙ булыр. Тәрбиәле әсә - бөтмәҫ-төкәнмәҫ хазиналыр, улар был донъяла оло бәхеттер. Бик ярлы булған өй эсендә тәрбиәле әсә булһа - ул өй иң байҙарҙан һаналыр. Бик бай булған өйҙәр ҙә, уның эсендә тәрбиәле әсә булмаһа, бик ярлы, фәҡир күренер. Тәрбиәле әсә үҙ балаларына ғына әсә булмайынса, бәлки, мосолмандарҙың барыһына ла хөрмәтле әсә булыр. Уларҙың баһаһы яҙып, тел менән һөйләп бөтәрлөк түгелдер. Тәрбиәле әсәләр тураһында Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт "Ожмах - әсәләрҙең аяҡ аҫтында" тигән.

Тәрбиәле әсә балаларын шәриғәт ҡушҡанса, яҡшы итеп тәрбиәләр. Үҙҙәренең балаларын "Аллаһы Тәғәләнән тапшырылған ғиззәтле-ҡиммәтле аманат", тип белеп, уларҙы һаҡлар өсөн йән һәм тәндәре менән тырышырҙар. Тәрбиәле әсә балаһын үҙе тәрбиәләр, мөмкин ҡәҙәр икенсе кешегә тапшырмаҫ. Сөнки баланы үҙ әсәһе һымаҡ бер кем дә тәрбиәләй алмаҫ. Шулай уҡ балаға биш йәш тулмаҫ элек шәфҡәтле аталар ҙа әсә ҡәҙәре була алмаҫ.

Әсә кеше балаларына тауыш күтәреп, ҡысҡырмаҫ, һуҡмаҫ. Тәрбиәле әсә һәр ваҡытта балаларының холҡон күркәм итергә тырышыр.

Тәрбиәле әсәләр балаларға аталарын иң хөрмәтле кеше итеп күрһәтер. Аталары ни ҡәҙәр йыуаш булһа ла, уларҙы иң ҡыйыу, иң бөйөк һәм иң ғәйрәтле кеше итеп танытыр. Кәрәк ваҡытта, балаларын аталары менән ҡурҡытыр. Ләкин балаларының ғәйебен үҙҙәре алдында аталарына сисмәҫ.

Тәрбиәле әсә яуыз иптәштәр менән юлдаш булыуҙың әшәкелеген һәм яҡшы кешеләр менән юлдаш булыу тейеш икәнлеген балаларына асыҡ белдерер. Шулай уҡ балаларҙы гүзәл һәм яуыз холоҡтарҙы айырырға өйрәтеп барыр. Әсә кеше балаларының сәләмәт һәм иҫән булыуҙары тураһында даими хәстәрләп торор.Шуның өсөн өй эсен бысраҡ нәмәләрҙән, сүптән, әшәке еҫтәрҙән сафландырыр. Ҡыш көндәрендә өйҙө ғәҙәттән тыш йылытыуҙан һаҡланырға кәрәк. Тәрбиәле әсә балаларын тирләгән ваҡыттарында һалҡын һауанан, үтәнән-үтә иҫкән елдән һаҡлар.

Тәрбиәле әсә балаларына асыҡмаҫтан элек ашауҙы, туймаҫ элек ашауҙан туҡтауҙы тыйыр. Ашҡаҙандың сәләмәт тороуы өсөн ошо ғәҙәт - беренсе сәбәптер.

Гел ултырып йәки ятып тороу - ни ҡәҙәр зарарлы булһа, йөрөү һәм эшләү - әҙәм балаһы өсөн шул ҡәҙәр файҙалылыр. Шуның өсөн, тәрбиәле әсәләр балаларын урамға алып сығып йөрөтөрҙәр, көстәре еткән ҡәҙәр эшләтерҙәр. Әсә ете йәшенән балаға намаҙ уҡырға өйрәтеү ҙә әсәнең мөҡәддәс бурысылыр. Сөнки намаҙ уҡыуҙың тән сәләмәтлеге өсөн файҙаһы баһалап бөткөһөҙ.

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Башҡорт телен нисек уҡытырға? Үҙ-үҙенә был һорауҙы бирмәгән уҡытыусы бармы икән? Гәзит-журнал биттәрендә лә, теле-радио тапшырыуҙарында ла был темаға бәхәстәр әленән-әле ҡубып тора. Был юҫыҡта Вәкил Исмәғил улы Хажиндың фекерҙәре, методик тәжрибәһе үҙенсәлекле. Ғалим фекеренсә, тап башҡорт теле уҡытыусыһы үҙенең дәресен ҡыҙыҡлы итеп ҡора белергә тейеш. Ундай уҡытыусылар күпме бөгөн? Был турала беҙ барыбыҙ ҙа беләбеҙ: аҙ түгел, шул уҡ ваҡытта күп тә түгел. Шундайҙарҙың береһе - бына инде 16 йыл Өфө ҡалаһының 35-се мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡытыусы Эльза ТОЛОМБАЕВА. Ул "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2011" республика конкурсы еңеүсеһе булды, күптән түгел Мәскәүҙә уҙған "Бөтөн Рәсәй туған һәм рус теле уҡытыусыларының оҫталыҡ класы" конкурсында ҡатнашып, Башҡортостан данын яҡланы һәм "Юғары педагогик оҫталыҡ өсөн" номинацияһында беренсе урын яуланы. Уҡытыусы Мәскәүҙә үткән конкурс тәҫораттары менән һәм башҡорт телен нисек уҡытырға, тигән һорауға яуап эҙләү буйынса тәжрибәһе менән уртаҡлаша.**

# БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘЙЕК,
## йәки Уҡыусыларың бер-береһенә шундай саҡырыу ташлаймы?

### Өлөшөмә төштө оло бәйге

Йыл һайын Мәскәүҙә ноябрь аҙаҡтарында "Бөтөн Рәсәй туған һәм рус теле уҡытыусыларының оҫталыҡ класы" конкурсы уҙғарыла. Быйыл ул бишенсе тапҡыр үтте. Конкурс йылдан-йыл әүҙемләшә, камиллаша, географияһы киңәйә бара. Конкурстың маҡсаты - мәғариф өлкәһендәге яңы инновацион эш алымдарын күрһәтеү, педагогик тәжрибәң менән уртаҡлашыу, Рәсәй Федерацияһында йәшәүсе төрлө милләт халыҡтарының туған телен һаҡлау һәм үҫтереү, ижади эшләгән уҡытыусыларҙы асыҡлау һәм хуплау.

Сарала илебеҙҙең төрлө төбәктәренән 47 уҡытыусы ҡатнашты. 23 рус теле, 24 туған тел уҡытыусыһы араһында ябай уҡытыусыларҙан тыш, дәреслек авторҙары ла, методистар, мәктәп директорҙары, хатта фән кандидаттары ла бар ине. Был юлы 4 татар, 2 сыуаш, тағы ла әрмән, бүрәт, эвен, яҡут, ҡабарҙы, балҡар, мари, осетин, мордва, ингуш һәм башҡа телдәрҙән уҡытыусылар көс һанашты.

Тәүҙә милли кейемдәргә конкурс үткәрелде. Икенсе турға уҡытыусы күҙлегенән сығып, "Минең регионым, мәктәбем һәм һөнәри эшмәкәрлегем" темаһына презентация йәки фильм эшләү ҡаралғайны. Беҙ Башҡортостан телевидениеһы менән берлектә фильм эшләнек. "Юлдаш" телевидениеһы журналистары Рәмзиә Кәримова менән Илдар Байбулатовҡа рәхмәтлемен: уларҙың ярҙамы менән бик уңышлы фильм килеп сыҡты.

### "Йығылып киттең, йәнем, ауыртманымы тәнең?.."

"Әсәйҙән дә ҡәҙерлерәк кем бар һуң донъяла" тигән теманы һайланым асыҡ дәрескә. Интернетта "Әсә йөрәге" тигән темаға шиғырҙарҙың күп булыуы ла нәҡ ошо темаға туҡталыуға сәбәп булды. Дәрес ваҡытында балаларҙан: "Тағы ла "әсәй" һүҙен ниндәй телдәрҙә әйтә беләһегеҙ?" - тип һораным. Улар белгәндәрен атаны, ә белмәгәндәрен интернет селтәренән таптылар. Әйткәндәй, мин уҡыусыларыма дәрестә компьютер ҡулланыуҙы тыймайым. Улар интернетҡа инеп, үҙҙәренә кәрәкле мәғлүмәтте эҙләй һәм шундуҡ таба. Бының тағы бер ыңғай яғы бар - интернет, компьютер менән берләштерелгән дәрес бала өсөн барыбер ҡыҙығыраҡ була.

Конкурс тураһында башлаған һүҙҙе дауам итәйек. Видеоға төшөрөлгән асыҡ дәресемдең бер өлөшөн күрһәтеп, бер аҙға уны туҡтатып тороп, экранда сағылған күренештәрҙе бер ыңғайҙан аңлатып барҙым. Был минең сығышымды йәнлерәк итте. Юғиһә, ҡайһы бер уҡытыусылар алға сығып, уларға бирелгән ваҡытты тик тороп, бушҡа үткәрҙе. Ә улар өсөн кадр артында дикторҙар тауышы ғына һөйләне. Конкурс ваҡытында ла ҡарап ултырыусылар менән бәйләнеш тоттом, шуның менән минең сығышым сәхнә әҫәре һымаҡ түгел, ә үҙемдең ҡәҙимге дәресем кеүек ҡабул ителде.

Артабан "Әсә йөрәге" ҡобайырына таянып, дәресте дауам иттем. Был ҡобайырҙа һүҙ йәш егеттең күрше йәйләүҙәге бер һылыуға ғашиҡ булып, ҡыҙҙың аяуһыҙ шартына - үҙ әсәһенең йөрәген алып килергә риза булыуы тураһында бара. Шулай итеп, яратҡан ҡыҙының талабын үтәп, әсәһенең йөрәген илткән саҡта, аңғармаҫтан, бер ҙур ташҡа абынып, ҡолай егет. Шул мәл йөрәк телгә килә: "Йығылып киттең, йәнем, ауыртманымы тәнең?.." - ти улына. Был һүҙҙәр ҡобайырҙың иде-



яһын асып бирә. Минеңсә, әсәләрҙең бөйөклөгөн тағы бихисап юлдар менән күрһәтеп булалыр, әммә был әсәр иң тәьсирлеләрҙең береһе. Хискә бирелгән конкурсанттарҙан: "Ә һеҙҙең телдә әсәй нисек яңғырай?" - тип һораным. Улар күптәре үҙҙәренең телдәрендә "әсәй" һүҙе нисек яңғырауын әйттеләр. Артабан хор менән әйттереп, башҡортса "әсәй" һүҙен өйрәттем. Ғөмүмән, тамашасыларымды ҡыҙыҡһындыра алғанмындыр, тип уйлайым, сөнки дәрес бөткәс, яныма килеп, төрлө һорауҙар биреүселәр, телефон номерымды һораусылар, дәресем өсөн рәхмәт әйтеүселәр ҙә булды.

### Миңә аҡһаҡалдар ярҙам итте...

Ҡабарҙы теле уҡытыусыһы - 28 йәшлек Светлана Кумыкованың дәресе халыҡ аҡылына бай булды. Дәресенән һуң мин унан: "Һинең дәресеңдә аҡыллы һүҙҙәр күп булды. Йәш кенә ҡыҙҙа бындай боронғо аҡыл ҡайҙан килә?" - тип һорауыма ул: "Миңә аҡһаҡалдар ярҙам итте", - тип, ҡыҫҡа ғына яуап бирҙе. Бынан сығып, үҙемә шундай һығымта яһаным: ололар аҡылына ҡолаҡ һала белергә тейеш башҡорт теле уҡытыусыһы. Шулай итеп, Кавказ ҡыҙының аҡһаҡалдар аҡылы менән нығытылған сығышы ла, дәресен яп-ябай ғына ҡар темаһына бағышлаған яҡут теле уҡытыусыһының ябай ғына теманы ла ҡыҙыҡлы итеп аса алыуы ла күптәрҙе һоҡландырҙы.

Минеңсә, оҫталыҡ класында уҡытыусының киң эрудициялы булыуы ғына тикшерелмәне, ә жюри ағзалары төрлө ситуацияларҙан дөрөҫ сыға белеү-белмәүен дә баһаланы. Мәҫәлән, конкурс башланырға бер көн ҡалғас, положениены үҙгәртеп, алдан хәбәр ителгәнсә, һәр турҙы айырым көндәрҙә уҙғарыу урынына, бер сығыш яһауһығына бөтә турҙарҙы ла бер-бер артлы үтеү шарты ҡуйылды: турҙар берләштерелде. Шулай итеп, уҡытыусының экстремаль хәлдәрҙә юғалып ҡалмауын һынанылар шикелле. Миңә өсөнсө булып сығыш яһау бәхете тейҙе.

### Үҙебеҙҙекеләр ярҙамы

Конкурс шарттары буйынса, дәрестә аңлатмалар рус телендә лә барырға тейеш ине. Ә "Әсә йөрәге" ҡобайыры әлегәсә рус теленә тәржемә ителгәне булмаған икән. Шуға күрә, ярҙам һорап, Зөһрә Бураҡаеваға мөрәжәғәт иттек. Әйткәндәй, Зөһрәнең: "Башҡорт башҡортҡа ярҙам итергә тейеш", - тигән һүҙе үҙе генә ни тора!

Шулай уҡ "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге" генераль директоры Әмир Минләәхмәт улы Ишемғоловҡа, "Эдвис" китап нәшриәтенә, "Пышка" компанияһына, Өфө ҡала округы мәғариф бүлегенә һәм Ленин районы хакимиәтенә, БР Мәғариф министрлығына, Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты хеҙмәткәрҙәренә, таяныс-терәк булыуҙары өсөн әсәйемә, ғаиләмә, мәктәп директоры Марина Шамил ҡыҙы Мәүлитоваға һәм коллегаларыма рәхмәтлемен.

### "Һыу һымаҡ эсеп..."

Мин бер ваҡытта ла балаларға һүҙҙәрҙең тура тәржемәһен бирмәйем. Йәғни, таҡтаға әҙер тәржемәләр яҙмайым. Әгәр балаларға ниндәйҙер яңы һүҙ осраһа, был һүҙҙең мәғәнәһенә яҡын торған һүҙҙәр менән йүнәлеш бирәм. Әйткәндәй, күп кенә синыфтар дәрестең тап ошо өлөшөн үҙ итә. Йомаҡ сисеү кеүек уйындар аша балалар яңы һүҙҙәрҙе тиҙерәк отоп ала. Әйтеп үтеүемсә, минең дәреслә балалар бик теләп йөрөй. Бәлки, был ылығыу минең улар менән тормошта ла аралашыуымдан киләлер. Уҡыусыларым менән социаль селтәрҙәр аша ла аралашам, сөнки улар тормошондағы ваҡиғаларҙы уҡытыусы белеп барырға тейеш, тип иҫәпләйем.

Беҙ башҡорт телен ике төркөмгә бүлеп уҡытабыҙ. Бер көндө 2 а синыфының күрше төркөмө уҡытыусыһы: "Һеҙҙә артыҡ балалар ултыра, башҡорт телен русса өйрәнгән балалар ҙа һеҙгә ингән", - ти. Бындай күренеш беҙҙә йыш ҡабатлана. Минең уҡыусым Спирий Корелов - грек. Ул БДМУ-ның стоматология факультетында уҡый. Бер көн миңә килеп, башҡорт телен өйрәтеүем өсөн рәхмәт әйтте. Мин унан: "Башҡорт теле тормошта һиңә нисек ярҙам итте?" - тип һораным. Ул: "Эш буйынса башҡорт йә татар милләтле оло йәштәгеләр менән йыш аралашырға тура килә, шунда миңә башҡорт теле бик ныҡ ярҙам итә", - тине. Тағы бер уҡыусым Артур Синцов - БДПУ студенты, ул күптән түгел Төркиәгә барған һәм унда практика үткән. Төрөк халҡының үҙҙәренең теленән башҡа телде, мәҙәниәтте ҡабул итмәүе, бары тик төрөксә генә һөйләшеүе рәсәйлеләргә тел көртәһе булдыра яҙған. Шулай ҙа минең уҡыусым уларҙың телен еңел аңлаған - башҡорт телен белеүе ярҙам иткән. Ул да рәхмәт әйтте миңә. Үҙе: "Минең ҡустым Егор мәктәптән башҡорт телен "һыу һымаҡ эсеп" сығырға тейеш, Эльза Юрисовна, өйрәтегеҙ уны, зинһар!" - тип үтенде...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Йәшәйештең ниндәй генә өлкәһен алып ҡарама, һәр өлкәлә беренселәр, энтузиастар була. Бөгөнгө геройыбыҙ - шундайҙарҙың береһе. Уның һымаҡтар тураһында: "Бына ул - ысын уҡытыусы!" - тип әйткәндәрен ишеткәнебеҙ бар. Әммә ниндәй генә яңы гениаль фекер тыуһа ла, ул быға тиклемгеһен ғәҙәттә инҡар итә йә тәнҡитләй. Шуға күрә беренселәргә, сағыу шәхестәргә эшләүе икеләтә ауыр. Эльза Толомбаеваның эш алымдарын бер мәҡәләгә генә һыйҙырып бөтөп булмауы асыҡ. Ул үҙе лә юғары һүҙҙәр һөйләп тороуҙы кәрәк тип тапманы был юлы: "Әгәр кемдер минән был конкурстың нисек булыуы тураһында һорап, пафослы яуап көтә икән, тимәк, ундайҙар яңылыша: был конкурс миңә тәү сиратта ысын дуҫтарым барлығын аңларға ярҙам итте", - тине.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# ТОРМОШ ГӨЛЛӘМӘҺЕ...

## әрем һәм аҡ сәскәнән яһала

- Өс серенде: ҡылған изгелегеңде, сиреңде, биргән хәйереңде күңелеңә биклән ҡуй, хазинаға тиң булыр.
- Тормоштоң дөрөҫ юлдарынан тайпылма - мөртәт исеме алырһың.
- Машина заманына һылтанма - ат туғарып, егә бел.
- Яуыз ауыҙынан сыҡҡан һыуыҡ һүҙ ҡот ебәрә, бәрәкәт осора, яҡшынан сыҡҡан ипле һүҙ йөрәкте дәртләндерә, күңелдәргә нур һибә.
- Ырғып тороп һуға алмаған мәйеттән ҡурҡма, аңғармаҫтан этлек ҡылған теренән һаҡлан.
- Быуындар бәйләнеше өҙөлһә, кеше яңғыҙлыҡта ҡала, ғүмер юлында күп хаталар яһай.
- Аш таты ауыҙҙа, эш тәме һеҙөмтәһендә беленә.
- Уйламай һөйләгән - ҡыйыҡһыҙ өй.
- Үҙ-үҙеңде ихтирам ит, дәртләндер, гел тәнҡитләмә, тормошто ярат - был ҙур уңыштар асҡысы.
- Яҙылған ҡанундарға ҡарағанда меңәр йыллыҡ аҡыл туплаған яҙылмаған ҡанундар көслөрәк.
- Үлем ҡайғыһы бер шаңҡыта, тере ҡайғы көн дә ҡаңғырта.
- Йылдар буйы асыу һаҡлау, кеше хәтерен ҡалдырыу, үс алыу һинең үҙеңде сиргә һабыштыра, селпәрәмә килтерә.
- Тормоштоң ҡаты һынауына тарымаҫ, тәрән упҡынына тәгәрәмәҫ өсөн кеше хаҡы ашауҙан, артыҡ мал алыуҙан һаҡланыу хәйерле.
- Тормош ул әрем менән аҡ сәскәнән эшләнгән гөлләмә: әсеһен дә, сөсөһөн дә татыта.
- Матур холоҡло, әҙәпле, тыйнаҡ кеше хикмәт әйәһенә тиң булыр.
- Рух күҙе асыҡ кеше тормош тураһында дөрөҫ фекерләй, ғәҙел һығымта яһай.
- Ирмен тигән ир ҡулында ир ҡорамалы булыр, бейек ҡәлғәләр ҡорор.
- Айран эсергә барға ин, бал теләһәң байға йүнәл.
- Тел ҡатмаҫҡа ғәҙел һүҙ, күңел туңмаҫҡа изге теләк ҙур дауа.
- Һәр эштә лә өйрәтеүсе-белемсенең һаны юҡ, эшләүселәр генә иҫәпле.
- Йыл миҙгеле - дүртәү, һанаулы, ғүмер миҙгеленә иҫәп юҡ.
- Гел ҡуктә осма - тигеҙ урында ла абынырһың.
- Байлығы көмеүҙән ҡурҡҡан кеше - емтек һаҡлаған этҡә тиң.
- Теҙелгән мәрйен тигеҙ ҙә ул, ғүмер юлы ғына ҡыйыш-мыйыш.
- Даныңа шапырынып, танау буйыңа ҡарама - соҡорға осорһоң.
- Һөйөү менән нурланмаған йөрәк - ҡый баҫҡан ташландыҡ баҡса.
- Сыбыртҡынан ҡамсыны айырмаған ир-егеткә шулар менән бер-икене тамыҙыу зыян итмәҫ: тиҙ аңлашырҙар.
- Сапҡан атты үҫтерергә ҡулдәй тир түгергә кәрәк.
- Юҡ-бар һылтау менән донъя арбаһынан төшөп ҡалырға бер милләттең дә хаҡы юҡ.
- Тыуған илде онотмаҫҡа әтәстәрҙән өлгө ал - экватор яҡтарын онотмай төнөн дә кикирикләйҙәр.
- Үткән берәүгә һүҙ ҡатма, мөйөш һайын хәбәр һатма - өрәгәс, әткә оҡшарһың.
- Йөне, күңеле керле кеше - ялтыр ҡабыҡлы йыланға тиң.
- Түрәләрҙең эш булмәһендәге ыҙғышы, сәкәләшеүе - урамдарҙа бола тыуҙырыу нигеҙе.
- Уңғандар ҡолаһа ла тороп йүгерә, алға саба, ялҡауҙар абынһа ла яу һуға, бәлә һала.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# ТАМҒА, ҠОШ ҺӘМ... ОРАН

**Башҡорттарҙың ырыу-ҡәбилә берләшмәләре тормошонда ырыу символдары: тамға, ҡош, ағас, оран мөһим роль уйнаған. Улар ҡәбилә ҡоролошо башланған осорҙа барлыҡҡа килеп, ырыу-ҡәбиләнең берлеген көүҙәләндергән. Үкенескә күрә, ырыу ойошмалары тарҡалғас, күп атрибуттар юғалған.**

Бөгөн, Раил Кузеев билдәләүенсә, 3,5 мең ырыу тамғаһы билдәле. Күп булыуына ҡарамаҫтан, ырыу тамғалары быуындан-быуынға тапшырыла килеп, боронғолоҡто һаҡлап торған. Шуға күрә, ырыуҙар, ырыу-аралары бүленешендә төрлө варианттар булыуға ҡарамаҫтан, төп тамғаларҙы бер нисә ҙур ырыуға ҡайтарып ҡалдырырға мөмкин. Әммә был тамғаларҙың килеп сығышы һаман да ахырынаса өйрәнелмәгән, шулай ҙа тарихсылар уларҙың ниндәй ырыуға ҡарағанлығын һәм был тамғаларға эйә кешенең теләһә ниндәй шәхси милеккә хоҡуғын раҫлап булыуын белдерә.

Асылы буйынса тамға ниндәйҙер тотем хайуанының эквиваленты ла, әләмдәрҙә төшөрөлгән үҙенсәлекле геральдик билдә лә булыуы мөмкин. Шулай уҡ ул һаҡлау функцияларын да үтәгән. Мәҫәлән, уны күсмә һәм ярымкүсмә тормошта әһәмиәтле тип һаналған предметтарға: ҡоралға, малға (хәрби аттарға, өйәр айғырҙарына һ.б.) һалғандар. Йәмғиәт ҡатламдарға бүленә, тормошобоҙға Ислам дине үтеп инә башлағас, тамғалар ҡабат шәхси милек билдәһе булып ҡала. Шәхси һәм ғаилә тамғалары барлыҡҡа килә.

Тамғанан айырмалы, ырыу ағасының һәм ҡошоноң тәғәйенләнеше икенсерәк була. Уларҙа башҡорттарҙың анимистик ҡарашы сағыла. Башҡорттарҙың хәтерендә ҡәбиләләрҙең һәм ҙур ырыуҙарҙың ҡайһы бер изге ҡоштарының һәм ағастарының атамалары һаҡланып ҡала. Шуны ла билдәләп китергә кәрәк: ырыу ҡоштарының күпселеге - ыласын класына (бөркөт, шоңҡар, ҡарсыға һ.б.), ә ағастар - ылыҫлы тоҡомдарға (ҡарағас, ҡарағай һ.б.) ҡарай.

Оран - ҡәбиләләштәр бер-береңде таныу өсөн шартлы саҡырыу. Уны башҡа ырыу-ҡәбилә халҡы белергә тейеш түгел, тип иҫәпләнгән, сөнки оран сакраль әһәмиәткә эйә булған, уның аша тотош ырыуға зыян килтерергә мөмкин, тип һаналған. Оран ҡәбиләләштәр араһында бары тик хәрби бәрелештәр йәки үлем хәүефе янағанда ғына ҡулланылған. Йәғни ҡәбиләләштәр ырыуҙың ҡанбабаларына ярҙам һорап күмәкләп мөрәжәғәт иткән. Алыш алдынан йәки бәрелеш ваҡытында оран ҡыҫҡырыу изге билдә тип һаналған.

Башҡорттарҙың ырыу символикаһы элементтарының уртаҡлығы әруахтарҙың йәне башта ағасҡа, һуңынан ҡошҡа әйләнә, тип күҙаллауҙан килеп сығырға мөмкин. Илгә афәт килгән йәки ауыр мәлдәрҙә уларҙы оран ярҙамында "уятырға" була. Йәғни был символикалар мәжүсилек осоронан алып йәшәй.

**Ғүмеремдең 75 тигән шаҡтай бейек артылышына күтәрелеп, уҙған юлдарымды күҙ алдынан үткәреп, эшләнгән эштәремде барлап, аҙмы-күпме һығымталар яһап ҡарау теләге тыуҙы. Уйлай китһәң, ғәйәт оҙон, ауыр һәм ҡатмарлы тормош һәм ижад юлы үтергә, күпте күрергә, күпте кисерергә тура килгән. Тулыраҡ, ентеклерәк күҙәтеүҙәр һәм һығымталар яһар өсөн айырым иҫтәлектәр китабы яҙырға кәрәк булыр ине. Был эште лә киләсәккә маҡсат итеп ҡуйҙым ҡуйыуын. Ә әле "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына эшләнгән эштәремдең ҡайһы берҙәре тураһында һөйләп үтмәксе булдым. Юбилейҙар үткәргәндә шулай итәләр бит.**

# МИН ДАЛАНАН
## Ә йөрәгем

### Тәүге һабаҡтар

Һүҙемде бынан биш тиҫтә самаһы йыл элек, ижадымдың башланғыс осоронда баҫылып сыҡҡан шиғыр юлдары менән башлап ебәрмәксе булдым:

*Мин даланан килдем ҡалаға,*
*Ә йөрәгем йәшәй далала.*
*Сәңгелдәгем моңом -*
*сал дала,*
*Далаларҙа йәнем һаҡлана.*

Эйе, мин ысынлап та дала улымын, илемә, халҡыма, яҡташтарыма, тыуып үҫкән төйәгемә, изгеләрҙән изге ер-һыуҙарыбыҙға яҡты һөйөү тойғоһо менән илһамланып йәшәүсе кешемен. Уҙған йылдар эсендә, шөкөр, күпме ерҙәр күрергә, әллә ни ҡәҙәр илдәр гиҙергә, береһенән-береһе бейегерәк тауҙарға артылырға, даръя һыуҙарға ҡолас ташлап йөҙөргә насип булды. Ғүмерҙә онотолмаҫлыҡ осрашыуҙар, йәндәй күргән дуҫтарым менән иңгә-иң терәшеп эшләү, йәшәү, ижад итеү бәхете лә тейҙе. Шуны ла әйтмәйенсә булмай: яуызлыҡ, ике йөҙлөлөк, тар күңеллелекте, бәғерһеҙлек, ялғанлыҡ, ояһыҙлыҡты ла күрергә, күреү генә лә түгел, артығы менән татырға тура килде. Изгелек битлеге кейеп йөрөгән иблестәр менән айҡашып, ҡулымдан килгәнсә яһиллыҡҡа ҡаршы торорға, һис юғында, яуыздар алдында тәрилкә тотмаҫҡа, ялағайланмаҫҡа, башты эймәҫкә, ауыр саҡтарҙа бөгөлөп төшмәҫкә тырышып ғүмер ителде. Нисек кенә булһа ла, үҙемсә йәшәүҙе, һәр ваҡыт үҙ-үҙем булып ҡалыуҙы өҫтөн күрҙем. Яңылышҡан, хаталанған саҡта ла фәҡәт үҙ юлым менән тырышып-тырмашып алға барҙым, әйтер һүҙемде йөрәк менән аҡыл ҡушҡанса әйтергә өйрәндем.

Әлеге үҙ аллы фекер йөрөтөүгә дәғүәләшеп йәшәүҙең ҡиммәткә төшөүе тураһындағы һүҙҙе дауам итеп, шуны әйтмәксемен. Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына мин берҙән-бер мөҡәддәс ниәт - яҙыусы һәм әҙәбиәт белгесе булыу хыялы менән барып кергәйнем. Биш йыл буйы шул маҡсатҡа өлгәшеү өсөн тырышып, тик юғары билдәләр генә алып уҡыным. Дүрт йыл буйы башҡорт әҙәби түңәрәгенә етәкселек иттем. Әҙәбиәт кафедраһы мөдиренең, декандың, фән эштәре буйынса проректорҙың туҡтауһыҙ аяҡ салыуҙарына ҡарамаҫтан, дөйөм университет күләмендә башҡортса әҙәби кисәләр үткәреүгә өлгәштем. Әҙәби түңәрәгебеҙ ул йылдарҙа ысын мәғәнәһендә ижад мәктәбенә, милли рухты үҫтереү үҙәгенә әйләнде. Тимер Йосопов элегерәк: "Беҙ бөтәнөбөҙ ҙә Шәкүрҙең шинеленән үҫеп сыҡтыҡ", - тип әйтә торғайны. Рәшит Солтангәрәев түңәрәктең тарихындағы ул осорҙо "шәкүрҙәр заманы" тип атаны. Ул осорҙағы университет "шоңҡар"сыларының бик күбеһе ижад донъяһында ысынлап та бейек осоштарға өлгәште, әҙәбиәтебеҙҙең төп көстәренә әйләнде. Ләкин электән ҡалған мәкерле бер алым бар - бәйгелә алдан килгән аттың башына һуҡһаң, ул, хайуанҡай, нисек алға сыҡһын инде. Миңә лә шундай мәкерлек әҙерләп ҡуйылғайны. Әйткәндәй, университетты әҙәбиәт тарихында бөтөнләй өйрәнелмәгән өр-яңы проблема - "Мифтахетдин Аҡмулла: Тормошо. Ижады. Донъяға ҡарашы" тигән темаға диплом эше яҡлап, ҡыҙыл дипломға тамамлағайным. Диплом эше етәксеһе профессор Ә.И.Харисов, тикшеренеүемде юғары баһалап, Р.Шәкүров был эше менән үҙен университет ишеген япҡан саҡта фән ишеген асып кереүсе һәләтле йәш белгесте хәтерләтә, тип күңелде үҫтереп тә ебәргәйне. Ләкин баяғы кафедра мөдире, проректор минең яҙмышты барыбер үҙенсә хәл итте: үҙҙәре кеүек үк тар ҡарашлы ректорыбыҙҙы ҡотортоп, миңә аспирантураға урын бирмәүгә өлгәштеләр. Эх, шул ваҡытта уҡ Аҡмулланың тормошон һәм ижадын өйрәнә алһам, халыҡ хәтерендә, халыҡ араһында һаҡланған бихисап рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлап алып ҡалған булыр инем! Ләкин бының менән генә эш бөтмәне әле, миңә, ғөмүмән, әҙәбиәт буйынса аспирантураға юл ябылды. Әмәлгә ҡалғандай, университетты тамамлағандан һуң ике йыл буйы дипломды бирмәй йөрөтә торған тәртип бар ине ул ваҡытта. Ғөмүмән, әҙәбиәтебеҙ фәне өсөн артыҡ кеше булып сыҡтым. Белеүемсә, бындай факт, йәғни тик "отлично"ға уҡып, йәш яҙыусы һәм тәнҡитсе булып танылған үҙенең студентын шундай хәлдә ҡалдырыу данлыҡлы Башҡорт дәүләт университеты тарихында ҡабат бер ҡасан да булманы һәм булмаһын да инде. Ә мин барыбер үҙемә юл ярҙым, барыбер, ниндәй генә ауырлыҡтар аша үтһәм дә, ғилем һәм ижад менән шөғөлләнергә тигән маҡсатыма өлгәштем, Аллаға шөкөр. Бының менән мин донъяның хөсөттәренә һәм хөсөтлөк юлына баҫҡан "остаздарыма" үҙҙәре тере саҡта уҡ: педагог тигән оло исем күтәреп йөрөйһөгөҙ икән, таланттарҙың юлын ҡыймағыҙ, һеҙҙең эсегеҙ тар булғанға улар ғәйепле түгел тигән мәғәнәлә һабаҡ бирҙем булһа кәрәк. Бынығы үҙенсә тормош һабаҡтары.

### Ә аспирантураға барыбер индем…

Шулай итеп, 1965 йылда, аспирантураға юл ябылыу менән, туп-тура "Совет Башҡортостаны" редакцияһына барып керҙем һәм бик тиҙ арала унда төптән егелеп эшләп алып киттем. Өс ай үтеүгә мәҙәниәт һәм көнкүреш бүлеге мөдире итеп ҡуйҙылар. Аҙаҡ әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеген тергеҙеп, мине шул бүлеккә мөдир итеп күсерҙеләр. Бында төрлө йылдарҙа Рәми Ғарипов, Рәшит Солтангәрәев, Ирек Кинйәбулатов, Динис Бүләков, бер аҙ ғына ваҡыт Сафуан Әлибай, Мәхмүт Һибәт менән бергә эшләнек. "Совет Башҡортостаны" редакцияһында, 1969 йылдың көҙөндә аспирантураға уҡырға кергәнгә тиклем, дүрт йыл буйы эшләп, мөхәррирлек өлкәһендә ҙур ғына тәжрибә тупланым. Ул осор "Совет Башҡортостаны" редакцияһы тарихында ла бик сағыу бер дәүер булып ҡалды. Йәш таланттарҙы үҫтереү, халыҡтың рухын күтәреүгә булышлыҡ итеү йәһәтенән бөтөн мөмкинлектәрҙе файҙаланырға тырыштыҡ. Был йүнәлештә һаҡлау һәм үҫтереү өсөн, дөрөҫөн әйткәндә, һәр ваҡыт көрәшергә, ныҡышмалылыҡ күрһәтергә тура килде.

1969 йылда матбуғатта ул ваҡыттағы СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының төрки тел белеме (башҡорт теле) буйынса аспирантураға инеү өсөн бер урынға конкурс иғлан итеүе тураһында белдереү баҫылып сыҡты. Миңә, нисәмә йыл буйы аспирантураға урын көтөп йөрөгән кешегә, шул конкурста ҡатнашыуҙан башҡа сара ҡалманы. Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов менән икәүләп бер урынға ғариза биргәнбеҙ булып сыҡты. Имтихан һөҙөмтәләре буйынса, икебеҙ ҙә бер үк төрлө балл йыйғанбыҙ ҙа ҡуйғанбыҙ. Ни эшләргә? Институт етәкселеге мәсьәләне бик аҡыллы хәл итеү юлын тапты: Ишмөхәмәт дуҫымды Ташкентҡа, Үзбәкстан Фәндәр академияһының Шәрҡ ҡулъяҙмалары институтына ике йылға стажер итеп уҡырға ебәрҙеләр, ә мине аспирантураға алып, Мәскәүгә, СССР Фәндәр академияһы Тел белеме институтына ебәрергә булдылар. Икебеҙ өсөн дә һис һүҙһеҙ уңайлы килеп сыҡты. Өс йыл аспирантурала уҡып, "Дим йылғаһы бассейны топонимияһы" тигән темаға диссертация тамамлап ҡайтып төштөм. Башҡортостанда ул топонимика буйынса икенсе диссертация булды.

### Фәндең бер нисә тармағына егелдем…

Шул ваҡыттан бирле мин, әҙәби ижад менән бергә, бына ҡырҡ йылдан ашыу инде фән өлкәһендә, дөрөҫөрәге, фәндең бер нисә тармағында төптән егелеп эшләп йөрөйөм. Ғилми тикшеренеүҙәремдең күпселеге, әлбиттә, топонимикаға арналған. Докторлыҡ диссертацияһын да фәндең ошо тармағы буйынса яҙҙым. "Көньяҡ Урал һәм Урал алды башҡорт топонимияһын тарихи-стратиграфик һәм ареаль тикшереү" тип атала ул. Ә бына "Ерҙең хәтер китабы" һәм "Исемдәрҙә - ил тарихы" тигән китаптарым киң ҡатлам уҡыусыларға иҫәп тотоп яҙылды. Беҙҙә топонимика өлкәһендә тәүге ғилми-популяр әҙәбиәт өлгөләре булды ул баҫмалар. Был йүнәлештә артабан да бик күп эшләргә кәрәк әле.

Топонимиканан тыш, башҡорт филологияһының тағы ла бер нисә тармағында йөҙөп йөрөп тигәндәй эшләргә насип булды. Был йәһәттән иң элек башҡорт яҙма әҙәби теленең революцияға тиклемге үҫеш юлын тикшереүгә арналған "Быуаттар аманаты" тигән хеҙмәтемде билдәләп үтмәксемен. Был тема беҙҙең тел белемендә бик актуаль проблема булып торҙо, сөнки Совет власының тәүге осоронда, йәғни, башҡорт халҡының революцияға тиклем үҙенең яҙма әҙәби теле лә, яҙма әҙәбиәте лә булмаған тигән яла ягыуҙан нисек тә ҡотолоу сараһын табырға кәрәк ине. 1960 йылдан беҙҙең әҙәбиәт һәм тел белгестәре әҙәби һәм яҙма мираҫыбыҙҙы ҡайтарыу йүнәлешендә әйтеп бөткөһөҙ ҙур эш атҡарҙы. Алты томдан торған академик "Башҡорт әҙәбиәте" тарихы ла фәнебеҙҙәге шул яңырыу күренеше булараҡ донъяға тыуҙы. Уның тәүге ике томы тулыһынса бына ошо нисәмә йылдар буйы инҡар итеп килгән революцияға тиклемге әҙәби мираҫыбыҙҙы тикшереүгә арналды. Был ике томда XI-XIII быуаттарҙан башлап 1917 йылдар арауығындағы рухи-әҙәби үҫеш тарихы эҙмә-эҙле, системалы рәүештә яҡтыртылды.

Яҙмыш ҡушыуы буйынса, айырыуса һуңғы 10-12 йыл эсендә башҡорт диалектологияһы фәне менән дә ныҡлап шөғөлләнеү зарурлығы килеп тыуҙы. Сөнки миңә 1998 йылдан башлап байтаҡ ваҡыт Башҡорт дәүләт педагогия университетында "Төркиәтселеккә инеш", "Төрки телдәренең сағыштырма грамматикаһы" кеүек предметтар, Башҡортостан топонимияһы буйынса махсус курс менән бергә башҡорт диалектологияһы буйынса лекциялар уҡыу, ғәмәли дәрестәр үткәреү йөкмәтелгәйне. Уҡытыу барышында диалектологияла ваҡытында хәл ителмәй ҡалған проблемалар барлыҡҡа ла асыҡланды. Бигерәк тә башҡорт диалектологияһы системаһын классификациялау мәсьәләһе яңыса ҡараштарҙан сығып эш итеү маҡсатын алға ҡуйҙы. Тикшеренеү барышында быға тиклем бөтөнләй күҙ уңынан төшөп ҡалған, тейешенсә өйрәнелмәгән һөйләштәр иғти-

> ***Университетты әҙәбиәт тарихында бөтөнләй өйрәнелмәгән өр-яңы проблема - "Мифтахетдин Аҡмулла: Тормошо. Ижады. Донъяға ҡарашы" тигән темаға диплом эше яҡлап, ҡыҙыл дипломға тамамлағайным. Диплом эше етәксеһе профессор Ә.И.Харисов, тикшеренеүемде юғары баһалап, Р.Шәкүров был эше менән үҙен университет ишеген япҡан саҡта фән ишеген асып кереүсе һәләтле йәш белгесте хәтерләтә, тип күңелде үҫтереп тә ебәргәйне. Ләкин баяғы кафедра мөдире, проректор минең яҙмышты барыбер үҙенсә хәл итте: үҙҙәре кеүек үк тар ҡарашлы ректорыбыҙҙы ҡотортоп, миңә аспирантураға урын бирмәүгә өлгәштеләр. Эх, шул ваҡытта уҡ Аҡмулланың тормошон һәм ижадын өйрәнә алһам, халыҡ хәтерендә, халыҡ араһында һаҡланған бихисап рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлап алып ҡалған булыр инем!***

✓ *Яңы йыйынтығымды "Ғүмер көҙөм" тип атаным. Эйе, ярһыу яҙҙар, йәйрәп килгән йәйге айҙарым күптән артта ҡалды инде. Әммә, ярай әле, ҡышҡа керер алдынан тәбиғәттең көҙ тигән алтын миҙгеле бар.*



барымды йөләп итте. Мәсәләнән, телебеҙҙең өс диалектҡа бүленеше, уның өсөнсө, төньяҡ-көнбайыш диалекты тураһындағы концепцияны артабан үҫтереү, өршәк, егән һөйләштәрен махсус өйрәнеү мәсьәләһен көн тәртибенә ҡуйыу кәрәк ине. Барлыҡ ошо проблемаларҙы ентекле өйрәнеп, башҡорт теле диалекттары һәм һөйләштәренең яңы классификацияһын эшләргә кәрәк булды. Ниһәйәт, 2010 йылда юғары уҡыу йорттары өсөн "Башҡорт диалектологияһы" тигән уҡыу ҡулланмаһын яҙып бөтөп, 2011 йылда ул хеҙмәтемде М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты нәшриәтендә айырым китап итеп баҫтырып сығарҙым. Был китаптың донъя күреүе менән үҙемиҫәптән миңә "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре" тигән юғары исем бирелде. Маҡтанылар, ҡотланылар, Нефтселәр мәҙәниәт һарайында тантаналы кисә үткәрелде, ә бер нисә ай үтеүгә мине, энә осондай ғына ла сәбәп таба алмаһалар ҙа, эшемдән бушатыу тураһында баш вата башланылар. Сөнки нәҡ ошо ваҡытта юғары вазифанан бушатылған бәндәгә йылы урын кәрәк булып сыҡты. Ә бит был төптө "йылы урын" түгел, ә төптән егелеп эшләй, энциклопедияның артабанғы яҙмышын хәл итә торған үтә яуаплы вазифа ине. Әммә юғарыла был турала уйлап та ҡараусы булманы. Башҡортостан Фәндәр академияһы Президиумында ла мине һәм минең эшемде яҡларлыҡ

Аҡмулла. Тормошо. Ижады. Донъяға ҡарашы" тигән китабымды яҙып бөтөп, юбилей көндәрендә ҡулыма алыу бәхете тейҙе. Ул минең иң яратҡан китаптарымдың береһе. Әгәр ҙә, төп эштәремдән ҡалған аҙ ғына буш ваҡыт иҫәбенә генә булһа ла был тема буйынса күп йылдар буйы һәр төрлө сығанаҡтарҙы, шул иҫәптән халыҡ араһында, халыҡ хәтерендә һаҡланған материалдарҙы йыйып тикшеренмәгән булһам, әгәр ҙә Әхәт Вилданов, Аҡмулла ижады буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлап, "Аҡмулла - яҡтылыҡ йырсыһы" тигән китабын донъяға сығармаһа, беҙ тотош бер дәүерҙең рухи хазиналарын юғалтҡан булыр инек. Был йәһәттән беҙ "Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы" эсте бошора. Аҡмулла тураһында, белһә лә, белмәһә лә, ғилми конференцияларҙа кем генә сығыш яһамай хәҙер. Аҡмулланы, йәнәһе, уртаҡ шағир тигән булып, өс халыҡ араһында бүлгеләп йөрөтөргә тырышыусы күршеләребеҙ ҙә төптө мәғәнәһеҙлек менән шөғөлләнә. Ә ни эшләп, улайға китһә, Туҡай уртаҡ түгел? Уны бит башҡорт та үҙенеке тип иҫәпләй, уның ижады башҡортҡа ла яҡын һәм ҡәҙерле. Өҫтәүенә, бөйөк шағирҙың әсәһе яғынан башҡорт булғанлығы ла яҡшы билдәле. "Байҙыҡы булһа - ҡотло булһын, ярлыныҡы булһа - ҡайҙан алдың?" тигән әйтем иҫкә төшә был осраҡта. Юҡ инде, әфәнделәр, әгәр һеҙ Аҡмулланың бөйөклөгөн танылйһығыҙ икән, тимәк, башҡорттоң да орт шағиры хәҙер бөтөн төрки һәм кешелек донъяһының илһамлы бер йырсыһы булараҡ йылдан-йыл нығыраҡ таныла бара.

### Шиғриәтем...

Фәндең, әҙәби ижадтың ниндәй генә йүнәлешендә һәм тармағында эшләһәм дә, ошо көнгә тиклем һаман да эш тә эш тип тешем төшөп бөтһә лә, ғүмер буйы шиғыр менән йәшәйем, башҡорт поэзияһында минең үҙ урыным, үҙ йырым һәм үҙ моңом бар тип иҫәпләйем. Хәйер, был фекерҙе ҡәләмдәш дуҫтарым да әйтеп, күңелемде күтәреп ебәргән саҡтар булды. Тәүге шиғырҙар йыйынтығымды "Йөрәгемдә - ҡояш" тип атағайным. Ни тиклем генә ҡаршылыҡлы,

# КИЛДЕМ ҠАЛАҒА...

## йәшәй далала

дән бигерәк студенттарыбыҙ өсөн ҡыуаныслы булды, сөнки башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса яҡшы әҙерлекле белгестәр сығарайыҡ тиһәк, иң элек заман талаптарына яуап бирерҙәй уҡыу әсбаптары әҙерләргә бурыслыбыҙ бит.

### Башҡорт энциклопедияһы тигән фән тармағы

Ғилем донъяһында айырыуса мауығып шөғөлләнгән эштәремдең береһе башҡорт энциклопедияһы тигән фән тармағын башлап ебәреү һәм үҫтереү хәстәрлеге менән бәйле. 1992 йылда, республикабыҙ Хөкүмәтенең махсус ҡарары нигеҙендә, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында башҡорт энциклопедияһы бүлеге ойошторолдо, мине уның мөдире итеп һайлап ҡуйҙылар. Иң тәүҙә күп томлы "Башҡорт энциклопедияһы"ның концепцияһы эшләнде, шуны бойомға ашырыу юлында беренсе аҙым булараҡ, "Башҡортостандың ҡыҫҡаса энциклопедия"һы тигән ҙур күләмле хеҙмәттең һүҙлеге төҙөлдө. 1995 йылдың мартынан башлап 1998 йылдың ғинуарына тиклем "Башҡорт энциклопедияһы" ғилми нәшриәтенең директоры булып эшләгән осорҙа, "Башҡортостандың ҡыҫҡаса энциклопедияһы"н төҙөнөк. Был фундаменталь хеҙмәттең урыҫ һәм башҡорт телдәрендәге баҫмалары минең ғилми мөхәррирлектә ҙур тираждар менән донъяға сыҡты. Был ваҡиға республикабыҙҙың фән һәм рухи мәҙәниәт тормошонда ҙур ваҡиға булараҡ билдәләп үтелде. 1997 йылдың февралендә республика Президентының Указы менән хеҙмәтте әҙерләүҙә ҡатнашҡан бер төркөм мөхәррирҙәргә маҡтаулы исемдәр, шул

бер генә әҙәм дә табылманы. Шул ваҡыттан башлап 10 томлы универсаль "Башҡорт энциклопедияһы" проекты юҡҡа сығарылды. Парадокс, әлбиттә. Ләкин ни хәл итәһең. Беҙ бит парадокстар донъяһында йәшәйбеҙ. Тормошобоҙҙоң әсе хәҡиҡәте бына шундай.

### Аҡмулланы өйрәнеүҙе дауам иттем...

Туранан-тура әҙәбиәт белеме менән шөғөлләнергә тура килмәһә лә, бөйөк шағирыбыҙ, минең ырыуҙашым - мең ҡәүеме башҡорто Мифтахетдин Аҡмулланың фажиғәле яҙмышы бер ваҡытта ла тынғы бирмәне. Уның тормош юлын, ҡабатланмаҫ ижади мираҫын йыйыу һәм өйрәнеү эшен үҙемдең бурысым тип



ҡатмарлы тормош юлы үтһәм дә, абынһам да, һөрлөкһәм дә, шөкөр, ошо шиғыр уты, рух яҡтылығы бөгөн дә ижадҡа әйҙәп тора.

Әле, һигеҙенсе тиҫтәмдең уртаһына еткәндә, һигеҙенсе шиғырҙар китабымды әҙерләнем. Күп түгел. Ләкин бынан тыш ғилми һәм әҙәби ижадтың бүтән тармаҡтарында тағы ла ике тиҫтә китабым тураһында иҫкә төшөрһәм, бер аҙ ғына күңел тынысланып биреп тә ҡуя. Яңы йыйынтығымды "Ғүмер көҙөм" тип атаным. Эйе, ярһыу яҙҙар, йәйрәп килгән йәйге айҙарым күптән артта ҡалды инде. Әммә, ярай әле, ҡышҡа керер алдынан тәбиғәттең көҙ тигән алтын миҙгеле бар. Шул алтын миҙгелдең йәмен дә күреп, мөмкин булғанынса емешен дә тиреп, уңышын да йыйып алырға насип булһын тип, ғаиләмә, балаларыма, илемә, халҡыма именлек һәм бәхеттәр теләп, инде оло йәшкә етеп, был яҡты донъяла йәшәгән һәр көнөм өсөн Хоҙай Тәғәләгә рәхмәттәр уҡып ултырам. Етмеш бишемде ҡаршылағанда, уҙған быуат аҙағында яҙған бер шиғырымда әйтелгәнсә, хәҙер ҙә "Бәйгеләрҙә мин дә ат өҫтөндә" тип әйтә алыуым менән бәхетлемен.

*Хәҙер Аҡмулла тураһында яҙыусылар күбәйҙе лә ул, ләкин уларҙың йыш ҡына үҙҙәре тапҡанды түгел, ә шул элекке эҙләп табылғандарҙы әүештәүеш итеүҙән, бер-береһен ҡабатлауҙан ары китә алмауы эсте бошора. Аҡмулла тураһында, белһә лә, белмәһә лә, ғилми конференцияларҙа кем генә сығыш яһамай хәҙер. Аҡмулланы, йәнәһе, уртаҡ шағир тигән булып, өс халыҡ араһында бүлгеләп йөрөтөргә тырышыусы күршеләребеҙ ҙә төптө мәғәнәһеҙлек менән шөғөлләнә. Ә ни эшләп, улайға китһә, Туҡай уртаҡ түгел? Уны бит башҡорт та үҙенеке тип иҫәпләй, уның ижады башҡортҡа ла яҡын һәм ҡәҙерле. Өҫтәүенә, бөйөк шағирҙың әсәһе яғынан башҡорт булғанлығы ла яҡшы билдәле. Юҡ инде, әфәнделәр, әгәр һеҙ Аҡмулланың бөйөклөгөн танылйһығыҙ икән, тимәк, башҡорттоң да бөйөклөгөн танымайынса булдыра алмайһығыҙ.*

иҫәпләнәм. 1981 йылда Аҡмулланың тыуыуына 150 йыл тулыу айҡанлы, ошо юбилей сараларын әҙерләү һәм үткәреү осоронда, бер ҙә арттырыу түгел, минең өлөшкә иҫәпһеҙ күп эштәр атҡарыу бурысы төштө. Бер йыл эсендә генә лә республика матбуғатында Аҡмулла тураһында өс тиҫтәнән артыҡ мәҡәлә баҫтырҙым. Иң мөһиме, урыҫ телендә "Шиғриәт йондоҙо: Мифтахетдин тигән мәшһүр хеҙмәте менән фәнебеҙҙә күркәм өлгө күрһәткән хөрмәтле Әхнәф Ибраһим улы Харисовтың эшен лайыҡлы дауам итеүселәр булдыҡ тип әйтә алам.

Хәҙер Аҡмулла тураһында яҙыусылар күбәйҙе лә ул, ләкин уларҙың йыш ҡына үҙҙәре тапҡанды түгел, ә шул элекке эҙләп табылғандарҙы әүештәүеш итеүҙән, бер-береһен ҡабатлауҙан ары китә алмауы бөйөклөгөн танымайынса булдыра алмайһығыҙ. Салауаттар, Аҡмуллалар, Зәйнулла Рәсүлевтар аша башҡорт рухы һеҙҙе лә күтәргән, һеҙгә лә йоғонто яһаған, беҙ ҙә үҙ-үҙебеҙҙе бүтән халыҡтарҙың, Көнбайыштың һәм Шәреҡтең рухи ҡиммәттәре менән байытып, шул илаһи киңлектәрҙә һәм бейеклектәрҙә ҡанат киреп йәшәгәнбеҙ һәм йәшәйбеҙ. Шуның өсөн дә бөйөк башҡ-

Ижад кешеһе өсөн ғүмер көҙө тағы шул яғы менән ҡәҙерле. Был бит, тәбиғәттәге һымаҡ уҡ, уй-фекер донъяһының тулышҡан, өлгөрөп еткән сағы. Өҫтәүенә, елкәне сейләндереп торған хөкүмәт эшенән дә ҡотолоу мөмкинлеге барлыҡҡа килә. Осһоҙ-ҡырыйһыҙ йәмғәт эштәренән дә бер аҙ арына алмаммы икән тип торам әле. Һаулығың ғына булһын, эшлә лә эшлә! Шундай ниәттәр менән алға өрлөп яңы маҡсат, ижади пландар ҡуйып ҡаршылайым ғүмеремдең 75 тигән артылышын.

**Уҡыусыларыма ҙур ихтирам менән,**
**Рәшит ШӘКҮР.**

***✓ Түтәлдәренә, аллы-гөллө сәскәләргә һоҡланмаҫлыҡ түгел шул. Үҙҙәренең ҡый үләндәре баҫҡан ишегалды менән сағыштырғанда ожмах баҡсаһы инде. Бына бит, Әмирҙең ата-әсәһе эсмәгәс, ниндәй матур йәшәйҙәр.***






Илгиз йоҡоһонан уянғас та тороп китергә ашыҡманы, кирелеп-һуҙылып урынында ята бирҙе. Ятҡан килеш өй эсенә күҙ һалды: атаһы ла, әсәһе лә күренмәй, тағы ла эсергә эҙләп сығып киткәндәрҙер инде. Ә һеңлеһе Гүзәл ҡайҙа? Ул кәйефһеҙ генә тороп, өҫтәл янына килде. Кистән бысраҡ килеш ултырған һауыт-һаба араһынан икмәк һыныҡы алып ҡапҡайны, унығына араҡы түгелгән булып сыҡты, ытырғанып, кире төкөрҙө. Кисә ас килеш йоҡлап киткәйне. Ошо арала бигерәк айнымай эсәләр шул. Ниңә бигерәк яраталар икән шул тәмһеҙ нәмәкәйҙе? Тәмһеҙ икәнен Илгиз белә инде, тәмләп ҡарағаны бар. Күптән түгел атаһы менән әсәһе уның алты йәше тулыуын "байрам" итеп иҫереп йығылғас, стакан төбөндәге араҡыны эсеп ҡараны. Мәжлестәгеләр бер-береһен ҡыҫтап, һәйбәт араҡы тип маҡтағас, тәмләп ҡарарға булғайны шул, ауыҙы яныуҙан кире төкөрҙө, һаҫыҡ, әсе, тәмһеҙ тәме ауыҙынан оҙаҡ китмәй торҙо.

Илгиз урамға сығып, ҡойма буйында ятҡан ташҡа сүгәләне. Гүзәл ҡайҙа йөрөй һуң? "Йөрөй" тип әйтеп тә булмай инде, тыуыштан ғәрип аяҡтарын һөйрәп, шыуышып ҡына йөрөй ул. Өс йәше тулып үтһә лә, йүнләп һөйләшә лә белмәй. Әллә ойоп киткән Илгиз, әллә абайламай ҡалды, ҡапыл ҡаршыһында тап-таҙа, ялтырап торған ҡара туфли кейгән аяҡтарҙы күреп, башын күтәрһә, ҡаршыһында ҡупшы кейенгән, йәтеш кенә һаҡаллы, мөләйем йөҙлө ағай баҫып тора. Түбәтәй кейеп йөрөгән был кешене күргәне бар Илгиздең. Уларҙың өйө янындағы тыҡрыҡ аша ауылдың үрге осондағы мәсеткә бара ул.

- Исемең кем әле һинең, улым? - тине ағай күптәнге танышын осратҡандай, ихлас йылмайып.

- Илгиз...

- Илгиз, әйҙә минең менән мәсеткә... - Илгиз өндәшмәне. Шулай ҙа урынынан тороп, шым ғына уның артынан эйәрҙе.

Мәсеттең янынан үткеләп йөрөһә лә, эсенә ингәне юҡ ине әле Илгиздең. Ҙур-ҙур келәмдәр йәйелгән иҙәндә бер төркөм ир-ат тыныс ҡына әңгәмәләшеп ултыра. Араларында оло йәштәге олатайҙар ҙа, урта йәштәгеләр ҙә бар, хатта бер нисә йәш егет тә күренә.

- Әссәләмәғәләйкүм!

- Вәғәләйкүм әс-сәләм хәҙрәт, - тип сәләмләп ҡаршыланылар уларҙы. "Исеме Хәҙрәт икән был ағайҙың", тип уйлап ҡуйҙы Илгиз.

-Һин, Илгиз, бына шунда ултыр, йәме,- тине Хәҙрәт ағай стена янында торған эскәмйәгә күрһәтеп. Үҙе башҡалар янына ыңғайланы. Барыһы ла урындарынан тороп, рәт-рәт булып теҙелешеп баҫты. Хәҙрәт ағай алға барып баҫты ла, таныш булмаған телдә нимәлер һөйләй башланы. Ҡулдарын берсә күтәреп, берсә төшөрөп, эйелеп-бөгөлдө. Йә шиғырға, йә йырға оҡшамай һөйләгәне, ҡалғандар уның һәр хәрәкәтен ҡабатлап бара. Ҡапыл бөтәһе бергә иҙәнгә ҡапланды ла, арт һындарын күтәреп, бер аҙға тынып ҡалды. Тороп бер аҙ ултырып алғас, тағы туңҡайып ҡатып ҡалдылар. Үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр күргән был тамашаны аптырауҙың сигенә сығып, иҫе-аҡылы китеп күҙәтте Илгиз, хатта асығыуын да онотто. Нимә эшләй икән был кешеләр? Уйнайҙар тиһәң, йөҙҙәре үтә етди, бер ҙә шаярғанға оҡшамайҙар. Оло кешеләр уйнап та тормаҫ инде. Шуның өсөн киләләр микән ни был мәсет тигән серле йортҡа?

Бына бер саҡ барыһы ла кеҫәләренән мунсаҡ сығарып алып, берәмләп шуны һанарға тотондолар. Оҙаҡ ҡына һананылар мунсаҡ бөртөктәрен. Һуңынан бөтәһе бергә ҡулдарын күтәреп, биттәрен һыпырып ҡуйҙылар. Хәҙрәт ағай халыҡҡа йөҙө менән әйләнеп, ниҙер һөйләй башланы. Башҡортса һөйләһә лә, Илгиз бер нәмә лә аңламаны тиерлек.

Халыҡ таралыша башланы. Хәҙрәт ағаһы уның янына килеп.

- Әйҙә, Илгиз, сәй эсеп алайыҡ, йома сәйе, - тип бер бүлмәгә алып инде. Электр сәйнүгенә һыу һалып, токҡа тоташтырҙы ла, мөйөштә торған шкафтан ашамлыҡтар алып теҙә башланы. Эсе өҙөлә яҙып асыҡҡан Илгиздең өҫтәлдәге тәмле-татлы ризыҡтарҙан күҙен ала алмағанын күреп:

-Әйҙә, яҡыныраҡ ултыр, әйҙә, хуш, - тине. Ул арала сәйнүк тә ҡайнап сыҡты. - Тештәрең төшөп бөткән бит, кәнфитте күп ашайһыңдыр һин?

- Юҡ, Хәҙрәт ағай, кәнфитте яратһам да, күп ашамайым мин, берәйһе күстәнәс бирһә, һеңлемә бирәм, ул бигерәк ныҡ ярата кәнфитте.

- Әсәйең һатып алмаймы ни?

- Ала, яңыраҡ ҡына тыуған көнөмдө үткәргәйнек, унда ла һатып алды...

- Атайың ҡайҙа эшләй?

- Ул кисә күршеләргә утын әҙерләште, унан алдағы көн иптәшенең бесәнен алып ҡайтырға ярҙамлашты.

- Улай икән... Әсәйең эшләйме?

- Юҡ. Ул фермала һыйыр һауа ине, һыйырҙарын алып киттеләр, хәҙер эшләмәй, эш юҡ, ти.

- Әйҙә, әйҙә, Илгиз, һин ашап ултыр, - тип ҡыҫтаны Хәҙрәт былай ҙа ҡарһаланып әле кәнфиткә, әле пәрәниккә үрелгән малайҙы.

Сәй эсеп алғас, хәҙрәт ағаһына бер аҙ өйрәнә төшкәс, үҙен баянан бирле борсоған һорауҙы бирергә баҙнат итте Илгиз:

- Хәҙрәт ағай, һеҙ нимә эшләнегеҙ ул бая?

- Ҡайҙа?

- Иҙәнгә берсә яттығыҙ, берсә торҙоғоҙ...

- Ә-әә, - хәҙрәт йылмайҙы - намаҙ уҡыныҡ, йома намаҙы. Берҙә күргәнең юҡмы ни намаҙ уҡығанды?

- Юҡсы. Ә нимә ул намаҙ? Уйынмы?

- Юҡ, Илгиз, уйын түгел ул намаҙ. Аллаһы Тәғәлә мосолман булған кешегә көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡырға ҡушҡан.

-Мосолман, Аллаһы Тәғәлә кемдәр улар?

- Аллаһы Тәғәлә - бөйөк ҡөҙрәткә эйә. Ул беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙың нимә эшләгәнен күреп-белеп тора. Намаҙ - Аллаһы Тәғәләнең бойороғон үтәү, уның ризалығы өсөн ғибәҙәт ҡылыу. Уның барлығына һәм берлегенә инанып, уның ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып йәшәгән кеше мосолман була инде. Тағы сәй яһайыммы?

- Юҡ.

- Кеҫәңә һалып ал! Хәҙрәт кәнфит һауытын уға табан шылдырҙы.Илгиз, ҡыуанып, кеҫәһенә кәнфиттәрҙе һалып алғас, ишеккә ыңғайланы.

- Туҡта әле, ашағандан һуң, Аллаһы Тәғәләгә биргән ризыҡтары өсөн шөкөр итеп, доға ҡылырға кәрәк, - тип ниҙер уҡыны ла, ҡулдарын күтәреп, битен һыпырып ҡуйҙы. Илгиз дә уның артынан ҡабатланы.

- Ашағандан һуң рәхмәт әйтергә ғәҙәтлән, ғөмүмән, кемдер һиңә изгелек эшләй икән, рәхмәт әйтергә кәрәк...

- Рәхмәт, Хәҙрәт ағай.

- Бына шулай. Һин килгеләп йөрө, йәме, Илгиз?

- Ярай...

Илгиз мәсеттән сыҡты ла, өйҙәренә ҡарай елдерҙе.

Сәғит хәҙрәт Илгиз күҙҙән юғалғансы тәҙрәнән ҡарап торҙо. Илгиздең атаһы Илдус менән бер класта уҡыны Сәғит. Бик тырыш, башлы малай булды, уҡыуы ла яҡшы, тәртип боҙоп та йөрөмәне. Әсәһе менән икеһе генә йәшәнеләр. Мәктәпте тамамлағас, район үҙәгендәге ПТУ-ла уҡып, сварщик һөнәрен үҙләштереп ҡайтты ла, совхозда эшләй башланы. Оло йәштәге әсәһенең берҙән-бер ҡараусыһы булараҡ, уны армияла хеҙмәт итеүҙән азат иттеләр. Тырыш егет тиҙ арала үҙ эшенең оҫтаһына әйләнде. Тик эштән һуң ауылдаштарының үтенесен кире ҡаҡмай, йомоштарын үтәй-үтәй эскесегә әйләнгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ҡайһыһына ҡапҡа, ҡайһыһына гараж ишеге, кемеһенәлер өйөнә йылылыҡ үткәреү өсөн торба иретеп йәбештерергә, йә башҡа берәй ярҙам кәрәк булып ҡына торҙо. Ауылда мәшәҡәт бөтәме ни? Эш бөткәс, һәр хужа ла, рәхмәт йөҙөнән, табын әҙерләй, яртыһын ҡуя. Анауы хәтле эште эшләгәс, бала-саға кеүек эсмәйем, тип ултырыуы оят һымаҡ. Тәүҙәрәк Илдус үҙен ирҙәр менән тиң тотор өсөн эсһә, һуңыраҡ - шулай тейеш кеүек ҡабул итә башланы. Ул саҡта эшләгән эшең өсөн аҡса алыу түгел, тәҡдим итеү ҙә оят кеүек ине. Ауылдаштар бер-береһенә ихлас ярҙам итәләр, хаҡ түләү йәки алыу тураһында һүҙ ҙә юҡ, сәйен-мейен эсәһең дә, вәссәләм, ике яҡ та риза, ҡәнәғәт.

Әсәһе мәрхүм булғас, бөтөнләй айныманы тиерлек. Өй аулаҡ ҡалғас, теләһә ниндәй әтрәгәләм йыйылды, ир-ат ҡына түгел, эсергә әүәҫ ҡатын-ҡыҙҙар ҙа урап үтмәне. Көндәрҙән бер көндө Илдус шундай ҡатындарҙың береһе Миңһылыуҙың ҡосағында уянды. Үҙенән 5-6 йәшкә оло ҡатынды тәүҙә ҡыуып маташты, һуңыраҡ, ахыры, яҙмышына күнде. Ир-егеттең күңеленә юл уның ашҡаҙаны аша үтә, тигәндәй, әсәһе үлгәндән һуң аслытуҡлы көн күргән Илдусҡа Миңһылыуҙың юҡтан-бар итеп әҙерләгән аш-һыуы ла хан һыйындай тойолғандыр. Эсмәгән сағында донъяһын гөл итеп тота Миңһылыу, ишек төбөнә түшәгән балаҫына ла ҡыйып баҫҡыһыҙ, тик айыҡ көндәре генә һирәк шул, эсә башлаһа - бер нәмә лә кәрәкмәй, донъяһы түгел, балаларын да онота.

Бөгөн Сәғит йома намаҙына сыҡҡас, урамда Илдусты осратҡайны, иҫерек икәнлеген күреп, өндәшмәй уҙып китте. Өйө артында моңайып ултырған Илгизде йәлләп, үҙе менән мәсеткә алып китте. Айыҡ сағында һөйләшеп ҡарағаны бар уның Илдус менән, тик бушҡа ғына.

Илгиз ҡайтып ингәндә Гүзәл тупһала ултыра ине, әсәһе һаман ҡайтмаған. Ул ҡыуана-ҡыуана һеңлеһенең итәгенә кәнфиттәрен бушатты. Гүзәл шатлығынан нишләргә лә белмәне, шунда уҡ береһен ҡағыҙын әрсеп һоғондо ла, әле береһен, әле икенсеһен алып ҡағыҙындағы һүрәттәрҙе ҡараны, уларҙы бер рәткә теҙеп һалып, берсә өйөп, берсә таратып уйнарға тотондо. Һеңлеһен шатландыра алыуҙан ҙур ҡәнәғәтлек кисергән Илгиз кинәнеп һөйләнде:

- Кәнфиттәрҙе Хәҙрәт ағай бирҙе, унда, мәсеттә күп, уларға Алла... Алла... - Аллаһы Тәғәлә тип әйтергә теләгәйне Илгиз, хәтеренә төшөрә алмай аҙапланды, - уларға бер ағай көн дә килтереп бирә икән...

Күп тә үтмәй, ҡапҡанан абына-һөрөнә әсәләре килеп инде, уға үҙе кеүек ҡыҙмаса бер ҡатын эйәргән, Шәмсиә апай икән.

- Эй-й, минең бәпестәрем йоҡонан торған икән, хәҙер сәй эсерәм, әйҙә, әйҙә, Шәмсиә, - тип өйгә инеп китте, әхирәте лә уның артынан тәнтерәкләне. Бер аҙҙан балалар сәй эсергә өмөтләнеп өйгә ингәндә, сәйнүк борҡорап ҡайнай, әсәһе хырылдап йоҡлай, ә Шәмсиә өҫтәлгә башын һалған килеш йырлап маташа ине. Илгиз һеңлеһен етәкләп кире урамға сыҡты. Өләсәһе иҫән саҡта уға барып һыйыналар ине. Башҡа барып морон төртөрлөк туғандары ла юҡ шул ауылда. Ярай ҙа Илгиз мәсеттә үҙәк ялғап алды, Гүзәл бит кисәгенән бирле бер нәмә лә ҡапҡаны юҡ, ағаһы һыйлаған кәнфиттән башҡа. Ишек алдында ҡотороп үҫкән әрем, алабута араһында Гүзәл ятып йоҡлап китте. Илгиз дә уның янына һуҙылды.

Атаһының һүгенгән тауышына тертләп уянған Илгиз тороп ултырҙы. Ҡайҙа ятҡанлығын аңлай алмай ян-яғына ҡаранды, яурындарын йыйырып ҡалтыранып ҡуйҙы, өшөткән дә икән, бейек үлән араһында тупраҡ дымлы икәнен бая һиҙмәгәндәр, күрәһең.

- Балалар ҡайҙа, тим мин һиңә, бар, эҙләп алып ҡайт, инәнде эт талаған бисә, рәхәтләнеп йоҡлап ята, - тип екеренде Илдус. Ул арала әсәһе Илгизде абайлап ҡалды.

- Ҡайҙа Гүзәл?

- Бында, йоҡлап ята, ана...

Атаһы абына-һөрөнә килеп Гүзәлде күтәреп алды ла өйгә инеп китте, әсәһе лә һөйләнә-һөйләнә артынан эйәрҙе. Илгиз ары һуғылып, бире һуғылып йөрөнө лә, ашарға бер нәмә лә тапмағас, инде нисәнсе көн өҫтәлдә ултырып банка төбөндә ойоған һөттө күтәреп эсеп ҡуйҙы. Урамға сығып, бер аҙ тапанып торғандан һуң, Әмирҙәргә табан атланы Илгиз. Әмир - уның дуҫы, һәйбәт малай, ҡайһы саҡ йөрөп ҡарарға велосипедын да биреп тора. Тик, ниңәлер, әсәһе Илгизде яратмай, уның менән уйнарға ҡушмай. Шуға күрә Илгиз әсәһенең күҙенә бик салынмаҫҡа тырыша. Әле лә, ҡапҡаны әкрен генә асып, башын тығып ҡына ишек алдын байҡаны. Дуҫы күренмәгәс, "Әмир" тип ҡысҡырҙы ла, ҡапҡа тышында торған эскәмйәгә ултырып, ҡойма егенән ихатаны күҙҙән үткәрҙе. Рәт-рәт булып теҙелгән алмағастарға, ҡарағат, сейә ҡыуаҡтарына, арыраҡ урынлашҡан ҡыяр, кишер, түтәлдәренә, аллы-гөллө сәскәләргә һоҡланмаҫлыҡ түгел шул. Үҙҙәренең ҡый үләндәре баҫҡан ишегалды менән сағыштырғанда ожмах баҡсаһы инде. Бына бит, Әмирҙең ата-әсәһе эсмәгәс, ниндәй матур йәшәйҙәр. Айыҡ ваҡытында Илгиз атаһы менән һөйләшә, шаярып та ала, иркәләнә, ә эсеп алһа, һөҙгәк үгеҙме ни, яҡын барырлыҡ түгел, күҙенә салынған кешегә бәйләнергә генә тора. Үҙе эсһә лә, әсәһенең эскәнен яратмай, шунан китә ыҙғыш-талаш.

Илгизде күңелһеҙ уйҙарынан арындырып, ҡапҡала Әмир күренде.

- Беҙ атай менән балыҡҡа барабыҙ, иртәгә уйнарбыҙ, йәме, - күҙҙәренән шатлыҡ нурҙары бөркөлгән Әмир шулай тине лә инеп тә китте.

**(Дауамы бар)**

ШАҒИРӘГӘ ӨС ҺОРАУ

# ШИҒРИӘТ...

## минең ҡанымда, йәнемдә



**Беҙ, совет осоронда формалашҡан ижадсылар, донъяны үҙебеҙ танығанса ҡабул итеп өйрәндек, ил халҡы инанғанға инандыҡ, шуның менән бәхетле инек. Ә бына ошо көндәрҙә үҙенең 70 йәшен билдәләүсе күренекле шағирә Әнисә Таһирова донъяның ҡырҡа боролошон, үҙгәреүен нисек ҡабул итте икән?**

-Совет осорон идеаллаштырырға йыйынмайым. Ул осорҙа ла ғәҙелһеҙлектәр, хатта фажиғәләр етерлек булды. Ләкин совет осоронда ил етәкселәре мәҙәниәткә, әҙәбиәткә битараф булманы. Ижад йорттары гөрләп эшләп торҙо, китаптарыбыҙ үҙебеҙҙә генә түгел, Мәскәүҙәге үҙәк нәшриәттәрҙә лә донъя күрҙе. 90-сы йылдарҙан башлап илебеҙҙә хаяһыҙлыҡ тамыр йәйә башланы. Сит илдән килгән бысраҡ, кешене эске яҡтан тарҡата торған идеология тәүҙә зәңгәр экрандарҙы, китап кәштәләрен, аҙаҡ кешеләрҙең күңелдәрен яуланы. Илдең тарҡалыуы шунан башланды ла инде. Әгәр ҙә ил етәкселәре, депутаттар мәҙәниәткә, әҙәбиәткә йөҙ менән боролмаһа, был тарҡалыу артабан да дауам итеп, илебеҙҙе тамам юҡҡа сығарыуы бар.

**Һеҙ шиғриәткә тоғро ижадсы. Башҡа жанрҙарҙа ижад итеү әмәле бирелһә, ҡайһыһын һайлар инегеҙ?**

-Шиғриәт минең ҡанымда, йәнемдә. Миңә йәшәү мәғәнәһе биргән ошо оло тойғом өсөн, ошо тиңһеҙ күктәр бүләге өсөн Хоҙайға рәхмәтлемен. Башҡа жанрҙарға килгәндә, мине күберәк поэтика менән һуғарылған кескәй күләмле сәсмә әҫәрҙәр ҡыҙыҡһындыра. Тургеневтың шиғри прозаһы, Чеховтың романтика менән һуғарылған хикәйәләрен яратам. Болғар яҙыусыһы Тодаревтың поэтик новеллалары миңә бик оҡшай. Үҙемдең дә байтаҡ ҡына элегияларым бар. Улар, ҡыҙғаныска ҡаршы, һуңғы китабыма инмәй ҡалды. Ҙур күләмле проза әҫәре яҙыр өсөн иң тәүҙә тыныс мөйөш кәрәк. Элек ваҡытлыса булһа ла ундай тыныс мөйөштө ижад йорттарында таба торғайным. Хәҙер ундай мөмкинлек юҡ, сөнки барлыҡ ижад йорттары ябылып бөттө. Яҙыусылар союзының элекке етәкселәренең, әҙәбиәт фонды директоры Зөлфәр Хисмәтуллин кеүек ағайҙарҙың хәстәрлеге менән бирелгән "хрущевкам" булмаһа, бәлки, башҡорт әҙәбиәтендә Әнисә Таһирова тигән шағирә булмаҫ та ине.

**70 йәш - ул ижадҡа ғына түгел, тотош ғүмергә ниндәйҙер һығымталар яһау баҫҡысы. Был осорҙа күп кенә ижадсылар автобиографик әҫәрҙәр, эсселар яҙа, ә һеҙ уҡыусыларығыҙҙы нимә менән һөйөндөрөргә уйлайһығыҙ?**

-Дөрөҫөн генә әйткәндә, иртәгә нимә яҙылаһын бөгөн өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын. Барыһы ла ил яҙмышына бәйләнгән. Илдә тыныслыҡ, именлек булһа, Хоҙай илһамынан мәхрүм итмәҫ, тип уйлайым. Сөнки минең бөтә тормошом әҙәбиәт менән бәйләнгән һәм унан башҡа йәшәүемде күҙ алдыма ла килтерә алмайым.

*Әнисә ТАҺИРОВА*

### Ҡар өҫтөндә миләш...

Ҡар өҫтөндә миләш тәлгәштәре
Шәлкем-шәлкем булып һибелгән.
Ап-аҡ ҡарҙа әллә усаҡ яна,
Әллә ал муйынса өҙөлгән.

Ә миләшкәй башын түбән эйгән,
Хәтерләйҙер үткән яҙҙарҙы.
Гәлсәр йылғаларҙың моңло йырын,
Йәйге, йылмайыулы таңдарҙы.

Заманында йәп-йәш миләшкәйҙең
Сағыу емештәре күп ине.
Серҙәштәре - ҡоштар,
Яратҡаны -
Алһыу таңдар, зәңгәр күк ине.

Тилбер ҡоштар күркәм көйҙәр менән
Байыттылар уны моңдарға.
Ә миләшкәй сағыу емештәрен
Ихлас бүләк итте уларға.

Бер-бер артлы етеҙ йылдар үтте,
Әрһеҙ ел-дауылдар ҡайттылар.
Уҫал елдәр сағыу тәлгәштәрҙе
Йолҡоп тирә-яҡҡа аттылар.

Өҙгөләнгән, йолҡҡоланған миләш
Һаман бирешмәне ҡыштарға.
Туңған килеш сағыу бөртөктәрен
Һаман бүләк итте ҡоштарға.

Ҡар өҫтөндә миләш ялҡынлана,
Һаман тере, һаман ул түҙем.
Ҡар тигәнем - тормош-даръя икән,
Аҡ ҡарҙағы миләш - мин үҙем.

* * *

Урал ере Тәңре көсө менән
Диңгеҙ төптәренән терелгән.
Шул бөйөк көс менән ошо ергә
Ҡурай һәм уҡ-һаҙаҡ бирелгән.

Ябай түгел ошо ике тамға -
Ул Тәңренең мөһөр-билдәһе.
Был тамғала милләт азатлығы,
Ғорурлығы, сәме, ил ғәме.

Уҡ-һаҙағы сая башҡортома
Илде һаҡлар өсөн бирелгән.
Ә ҡурайҙың сихри моңдарынан
Гөл-сәскәләр балҡып терелгән.

Ошо сихри моңдан
Тау күкрәгән
Ярып сыҡҡан шишмә юл алған.
Ошо сихри моңдан
Батырҙарҙың
Ауыр яралары уңалған.

Башҡорт ерҙәренә кемдәр генә
Яҫҡынмаған, ҡараш атмаған.
Башҡорт ерен осҡор уҡ-һаҙағы,
Башҡорт йәнен ҡурай һаҡлаған.

Батырлығың, тапҡырлығың менән
Күпме күтәрҙең һин ил данын!
Париждарға еткән сая башҡорт,
Ниңә әле бөгөн баҙаның?

Нимә булды?
Ниңә милләттәштәр
Күтерҙәргә бора аҙымын?
Күпме йәндәр бөгөн һәләк булды
Йотоп утлы иблис ағыуын!

Иблис ҡотҡоһонан күпме ҡыҙҙар
Урамдарға сығып баҫтылар.
Дәһриҙәргә керһеҙ тәндәрен дә,
Аҙаҡ йәндәрен дә һаттылар.

Кемдер атлай намыҫ һуҡмағынан,
Йәшәй тоғро хеҙмәт, йәм өсөн.
Кемдер ҡаба нәфсе тоҙағына,
Йәнен ҡыя байлыҡ, дан өсөн.

Иблис ҡотҡоһона бирелгәнде
Яҙмыш теҙләндерер, ҡол яһар.
Хаҡлыҡ, сафлыҡ менән йәшәгәнде
Көслө рух һәм изге моң һаҡлар!

### Белгең килһә халҡың әрнеүҙәрен...

*Үлем язаһына хөкөм ителгән комбриг Муса Мортазиндың һуңғы фотоһын күргәндән һуң*

Был күҙҙәрең...
Утлы күҙ йәштәрең
Таш иҙәнде тишеп үткәндер ул.
Һиңә бығау һалған ялсыларҙың
Һатлыҡ йәндәрен дә өткәндер ул.

Был күҙҙәрең...
Сыҙай алмайынса
Ҡарашыңдың тере ташҡынына,
Түбән йәне өсөн үсен алып,
Баҫҡандыр ҙа ҡатил алҡымыңа.

Был күҙҙәрең...
Фәрештәһе киткәс,
Тамуҡ уты өткән күҙҙәр былар.
Йәнде ҡанһыратҡан ҡарашыңдан
Ете ырыу халҡы үкһеп илар.

Был күҙҙәрең...
Яҙмыш ниңә шулай
Мәрхәмәтһеҙ һәр саҡ аҫылдарға?
Ниңә иблис тантанаһы өсөн
Бөйөктәрҙе ата ялҡындарға?!

Был күҙҙәрең...
Белгең килһә әгәр
Халҡың йөрәгендә ниндәй яра,
Һыҙланыуҙар, әрнеү, тетрәнеүҙәр,
Иң тәү, башҡорт, был күҙҙәргә ҡара!

### Таң алдынан күргән төш

Таң алдынан күргән сәйер төштө
Ҡат-ҡат күңелемдән кисерҙем.
Тынғыһыҙлап торған уйҙарымды,
Төйнәп, аҡ ҡағыҙға төшөрҙөм.

Урта быуат ғалимына оҡшаш
Ниндәйҙер ир -
Тоташ аҡ кейемдән -
Минең өҫтәлемә таҫлап-таҫлап
Ҡалын ҡағыҙ ҡатламдарын өйгән.

Миңә ҡыйын.
Бынау күрекле ир
Нишләй икән минең "хрущевка"ла?
Аҡ ҡалпағы сәсен ҡаплаһа ла,
Күреп торам ул бик оло йәштә.

Өҫтәлемдә ятҡан ҡағыҙҙарға
Бер-бер артлы ҡуя сәйер билдә.
Унан әкрен генә былай тине:
"Ҙур һынылыш булыр һеҙҙең илдә.

Алда һеҙҙе ауыр һынау көтә,
Хәүеф-хәтәрҙәр күп ерегеҙҙә.
Еңел булмаҫ илде етәкләгән
Сәсенә сал төшкән олпат ирҙә.

Хәтәр көстөң ҡара шауҡымдары
Бик йыш ҡына ерегеҙҙе аулар.
Тик ҡалдырмаҫ һеҙҙе бөйөк Тәңре:
Үҙегеҙҙе, илегеҙҙе һаҡлар.

Берҙәмлек тә, сыҙамлыҡ та кәрәк
Барығыҙға. Һынау көтә, һынау..."

Тертләп күҙем асам.
Аңламайым,
Әллә йоҡола мин, әллә уяу...

### Яҙҙым исемеңде

Ҡыштар еткәс, яҙҙым исемеңде,
Көрттәр ярып ап-аҡ ҡарҙарға.
Исемеңде алып китте ҡарҙар -
Гөрләүектәр булып яҙҙарға.

Диңгеҙ буйҙарында исемеңде
Ҡомға яҙҙым тымыҡ ярҙарҙа.
Ул яҙыуҙы диңгеҙ тулҡындары
Аҙаштырҙы әллә ҡайҙарҙа.

Исемеңде йөрәгемә яҙҙым
Йәшлек гөләм сәскә атҡанда.
Сәстәремдә - ҡырау.
Ә исемең
Йәшәй күңелемдә һаман да.

### Автобус көткәндә

Йәп-йәш кенә ҡыҙ һәм егет
Башта төтөн һурҙылар.
Һурып туйғас, ауыҙҙарға
Күпләп һыра ҡойҙолар.

Ярҙай халыҡ араһында
Суп та суп үбештеләр.
Бесәй булып ялаштылар,
Кәзәләй төкөштөләр.

Ҡай берәүҙәр көлөп ҡарай,
Ҡайһылары таң ҡала...
Ахыры, хәҙер аҙғынлыҡ та
Мөхәббәт тип атала.

### Боҙ ҡаласыҡ

Яңы йылдың шаулы бер кисендә
Мин боҙ ҡаласыҡҡа юлыҡтым.
Юлыҡтым да, күңел төбөндәге
Барлыҡ юшҡындарҙы онноттом.

Кеше хыялының матурлығы
Биҙәгән был әкиәт-ҡалаға
Мин һоҡланып баҡтым:
Был кистәрҙә
Шатлыҡ бит ул күпме балаға!

Юлымдан мин хатта туҡтап ҡалдым,
Әсир итте матур тамаша.
Дан шыршының яҡты балҡышынан
Күңел үҫә, күҙҙәр ҡамаша.

... Бөгөн мине шыршы урынында
Ҡаршылаңы ҡара ер генә.
Боҙ-ҡаласыҡ ирер.
Күңелдәрҙә
Ҡалыр бары хыял-сер генә.

Ни өсөндөр шул саҡ хәтерләнем
Һинең әсирләүсе һүҙҙәрҙе.
Аһ, мөхәббәт!
Боҙ-ҡаласыҡ һымаҡ,
Ҡамаштыра ине күҙҙәрҙе!

Әрнеү һала, яра һалып китә
Һаташтырған алдаҡ мөхәббәт.
Һинән бары аҡ хәтирә ҡалыр,
Боҙ ҡаласыҡ,
Шуға мең рәхмәт!

### Аҡ йондоҙҙар яуһа...

Тын иртәлә аҡ йондоҙҙар яуа,
Сыңлы көйҙәр сиртә ел-ҡумыҙ.
Аҡ бурандар көрттәр һалған мәлдә
Беҙҙең яҡҡа төштө юлығыҙ.

Аҡ бурандар юлды күмһәләр ҙә,
Күңел йондоҙҙарын күммәгән,
Сөнки йондоҙ-ҡарҙар һеҙҙе шулай
Беҙҙең тарафтарға әйҙәгән.

Шуға ла бит аҡ йондоҙҙар яуа
Күңелдәрҙе, ерҙе нағышлап.
Әйтерһең дә, улар йырҙар яҙа
Дуҫлыҡ һуҡмағына бағышлап.

Тиҙҙән ҡабат алып китер инде
Беҙгә алып килгән юлығыҙ.
Аҡ йондоҙҙар яуһа,
Беҙҙән килгән
Сәләм итеп ҡабул ҡылығыҙ.

***✓ Яҡын һәм тоғро дуҫтары күп булған кешенең ғүмере оҙон була. Был фактты Американың Юта һәм Яңы Каролина штаты университеты ғалимдары билдәләгән.***



ИНТЕРНЕТТАН



## МИҢЛЕБИКӘЛӘР... ҡартлыҡҡа бирешмәй

■ Ҡыҙғанысҡа күрә, барыбыҙ ҙа сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыуыбыҙ менән маҡтана алмайбыҙ. Шулай ҙа аҙнаның биш көнө дауамында көнөнә бер тапҡыр ғына булһа ла йәшелсә ашайһығыҙ икән, һеҙ үҙегеҙ менән ғорурлана алаһығыҙ. Был осраҡта организм шлактарҙан таҙара, тип белдерә Көньяҡ Корея ғалимдары. Сеулдағы Милли университетта үткәрелгән тикшеренеү һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, биш көнлөк йәшелсә диетаһынан һуң организмда зарарлы химик матдәләр күләме түбәнәйә. Йәшелсә ашау ярҙамында фталат һәм антибиотик матдәләрҙең күләмен дә түбәнәйтергә мөмкин.

■ Психологтар фекеренсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 85 проценты башҡаларҙың тормошонда булған хәлде ишетеүҙән ҙур ҡәнәғәтлек ала, ә һәр унынсы гүзәл зат был серҙе башҡаларға ла һөйләй. Һуңғы яңылыҡтарҙы тикшереп алыу кешегә үҙенең тормошон тулыландырырға мөмкинлек бирә, имеш. Доктор Колин Гилл иҫәпләүенсә, ғәйбәт "сәйнәү" серотонин кеүек гормондар бүленеп сығыуына булышлыҡ итә, был гормондар стресс һәм хәүеф күләмен кәметә. Тимәк, ғәйбәт һөйләү - кешегә үҙен бәхетлерәк тойорға ярҙам итә. Гарвард университеты ғалимдары иҫәпләүенсә, ғәйбәт башҡа кешеләрҙең холҡо тураһында мәғлүмәт тупларға булышлыҡ итә, эволюция күҙлегенән сығып ҡарағанда, был үтә мөһим. Йәғни, кеше башҡалар өлгөһөндә дөрөҫ йәшәргә өйрәнә.

■ Американың Йәмәғәт сәләмәтлеге ассоциацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үҫмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары йышыраҡ осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә һәм шуға ла ата-әсәләре менән конфликтҡа инә. Бынан тыш, был үҫмерҙәрҙең 62 проценты тәмәке тарта һәм 79 проценты алкоголле эсемлек ҡуллана. Белгестәр әйтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем аралашыусы үҫмерҙәр иртә енси тормош башлай һәм улар араһында наркомандар күберәк була.

■ Ғалимдар, йөҙҙәрендә миңдәре булған кешеләр ҡартлыҡҡа бирешмәй, тип белдерә. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, тәндәрендә 100-ҙән ашыу миңе булған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең һөйәктәре нығыраҡ була, тимәк, улар остеопороз сиренә бирешмәй. Бынан тыш, бындай кешеләрҙең йыйырсыҡтары аҙыраҡ була һәм шуға ла улар үҙ йәшенән уртаса 7 йәшкә йәшерәк күренә. Әлбиттә, миңле кешеләргә тире яман шеше лә янай, шуға ла уларға табиптар ҡояшта оҙаҡ ҡыҙынырға кәңәш итмәй. Әммә Лондон тикшеренеүселәре миңдәрҙең ыңғай яҡтары күберәк тип иҫәпләй. Ғалимдар хәҙер миңдәрҙең йөрәк һәм күҙҙәр сәләмәтлегенә йоғонтоһон тикшерә.

■ Яҡын һәм тоғро дуҫтары күп булған кешенең ғүмере оҙон була. Был фактты Американың Юта һәм Яңы Каролина штаты университеты ғалимдары билдәләгән. Тикшеренеү барышында асыҡланыуынса, кеше ни тиклем күберәк аралаша, шул тиклем оҙағыраҡ йәшәй, имеш. Белгестәр әле был феноменды фәнни яҡтан нигеҙләргә ашыҡмай. Шулай ҙа профессор Берт Учино белдереүенсә, социаль әүҙемлек күп яңы эмоциональ тойғолар кисерергә мөмкинлек бирә. Үҙ сиратында, тоғро дуҫтар һәр саҡ ярҙам итергә әҙер, тормош йөгөн дә улар менән күтәреүе еңелерәк.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# АХЫРЫЗАМАН ҠАСАН ЕТӘ, ТИП...

## баш ҡатырып ултырмайыҡ!

**Боронғо ваҡыттарҙа уҡ кешеләр киләсәкте белергә тырышҡан. Бының өсөн төрлө ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар ҡулланғандар, магияға мөрәжәғәт иткәндәр. Хатта батша һарайҙарында шәхси астрологтар тотҡандар. Ябай халыҡ та күрәҙәселәрҙең фаразына ҡолаҡ һалған. Шамандар, сихырсылар, күрәҙәселәр - уларҙың барыһының да эшмәкәрлеге киләсәктең шаршауын саҡ ҡына булһа ла асып биреү булған. Бөгөн, яңы технологиялар, фәнни аҡыл өҫтөнлөк иткән заманда ла күрәҙәселәрҙең һәм бәйғәмбәрҙәрҙең фараздарына урын табыла. Кешеләр боронғонан ебәрелгән "сәләм"дәрҙе аңлатырға тырыша, хәҙерге заманда ла юҡ юҡ та үҙенең күрәҙәлеге менән шаҡ ҡатырған серле кешеләр осрап ҡуя. Боронғо күрәҙәселәрҙең фараздарын аңлатыу менән етди кешеләр шөғөлләнә, катаклизмдар һәм глобаль ваҡиғалар хаҡында иҫкәртергә тырыша. Алда торған 2012 йыл тураһында улар бөйөк күрәҙәселәрҙең фараздарына ниндәй аңлатма һала икән?**

### Нострадамус фаразы: 2012 йыл Өсөнсө донъя һуғышы йылы буласаҡ

Йыл башында уҡ боронғо текстарҙы өйрәнеүсе Кришна Мурти Нострадамустың 2012 йылға фараздарын халыҡҡа еткергәйне. Текстың башында уҡ, ул ваҡытҡа һуғыш башланған буласаҡ, ул бөтөн донъяны ялмап аласаҡ, тиелә. Һуғыш ғәҙәти булмаясаҡ. Ҡайһы бер илдәрҙә ҡан ҡойоласаҡ, уларҙа халыҡты күпләп юҡ итеү ҡоралы ҡулланыласаҡ, икенсе илдәр иһә быға тиклем бер ҡайҙа ла ҡулланылмаған ҡоралдан зыян күрәсәк. Нострадамус һуғыш башлаусыны "бур" тип атай һәм уны барыһы ла беләсәк, ти. Был "бур" барыһын да шулай итеп ойоштораса ҡ, өсөнсө донъя һуғышы ҙур локаль низағтарҙан һәм граждандар һуғышынан тоҡанасаҡ. Халыҡ үҙ нәфрәтенә тонсоғоп, эргәләрендәге барыһын да ҡырасаҡ, әммә ғәйеплене "һыу артынан" эҙләмәйәсәк. Бөгөн Яҡын Көнсығыштағы ваҡиғалар был күрәҙәлектең бер бәләкәй генә сағылышы. 2012 йылдың уртаһына тиклем ҙур державалар һуғышҡа ҡатышмаясаҡ. Ә уларҙың халҡы тынысһыҙланмаһын өсөн, матбуғат саралары ярҙамында баштарын бутаясаҡтар. Әммә 2012 йылдың уртаһында бөтөн донъя халҡы донъяла нимә барғанын асыҡ аңлаясаҡ. Шуға ла, башы буталған халҡы ил эсендә низағ тыуҙырмаһын өсөн, ҙур державалар үҙ эшмәкәрлеген башлаясаҡ.

2012 йыл һуңында өсөнсө донъя һуғышы финиш һыҙығына сығасаҡ һәм бер илдән башҡа бөтөн илдәрҙә лә халыҡ бер нисә супердержава ҡулланған яңы төр ҡоралдан үләсәк. Был, моғайын, климатик ҡорал булыр. Ҡайһы бер төбәктәрҙә халыҡ химия тәьҫиренән үләсәк. Әммә был химик ҡорал ҡулланыу тигәнде аңлатмай, ә көслө климат аномалиялары һөҙөмтәһендә сәнәғәттең төрлө тармаҡтарының юҡҡа сығасағын аңлата.

Үҙ фараздарында Нострадамус өсөнсө донъя һуғышында аяғында ныҡ баҫып ҡаласаҡ, хатта һуғыш һөҙөмтәһендә хәлһеҙләнгән илдәрҙән юғарыраҡ тораса ҡ бер ил тураһында әйтә. Текстан уның ниндәй ил булыуы билдәле түгел, әммә ул боронғо тарихҡа һәм мәҙәниәткә эйә, XVI быуатта уҡ билдәле ил. Уның хаҡында Нострадамус ҡатын-ҡыҙ енесле итеп яҙа: "Силу Любви даст великая Дама, уйдет от войны, шума и гама, Вестником мира станет она, пред нею отступит злость и война". Бында профессор Кришна Мурти ике вариант тәҡдим итә: Һиндостан (Индия) һәм Рәсәй (Россия). Икеһе лә территориялары буйынса ҙурҙар һәм тере ҡалған халыҡтарҙы һыйындыра, уларҙы йәшәтә һәм ашата алалар.

Әммә Нострадамустың фаразының һуңғы өлөшө бик өмөтләндермәй. Хатта бер держава имен ҡалғанда ла ерҙәге тамуҡтан ҡотолоу күктәге яҡтылыҡ булып килер, ти ул. Ләкин бының ҡасан булырын аныҡ ҡына белдермәй. Был ваҡиғаның 2012 йылда булмауы ла ихтимал. Йәғни донъя етди йыһан фажиғәһенән үләсәк: "Светом небесным зло будет убито, люди уйдут, Земля будет забыта"...



## Ванга фаразы: 2012 йылдағы ҡурҡыныс хәлдәр

Заманыбыҙҙың бөйөк күрәҙәсеһе тип Ванганы әйтергә мөмкин. Ул айырым кешеләрҙең генә түгел, тотош дәүләттәрҙең яҙмышын әйтеп биргән. Уның барлыҡ күрәҙәләге лә тормошҡа ашҡан. Нострадамус менән сағыштырғанда, Ванганың фараздары ситләтелгән тел менән түгел, ә аңлайышлыраҡ әйтелгән. Әммә ҡайһы берҙә уның әйткәндәрен дә аңламаған кеше киреһенсә бороп ҡуйыуы мөмкин, шуға уның күрәҙәлектәрен махсус кешеләр генә тәфсирләй.

Ванганың 2012 йылға фаразы ла туранан-тура һуғыш менән бәйле. Ул 2010 йылда Израилдән башланырға тейеш була. Ванганың ыңғай фаразы ла бар - тиҙҙән ғалимдар яман шеште дауаларҙай дарыу уйлап табасаҡ. Шулай уҡ донъяуи йылыныуға бәйле ерҙәге тормоштоң үҙгәреүе лә көтөлә. Әммә Ванганың фараздарында 2012 йылда кешеләр йәшәгән планетаның үлеүе хаҡында бер нәмә лә әйтелмәй. Ҡояштағы ҡеүәтле ҡабынырҙар хаҡында күҙаллауҙар бар, быны астрономдар ҙа иҫкәртә килә. Февралдә планетабыҙ Нибуру һәм Ҡояш планеталары араһынан үтәсәк һәм ошо мәлдән катаклизмдар башланасаҡ та инде. Йәғни Ҡояшта көслө ҡабыныуҙар булып, улар тәбиғәт катаклизмдарын тыуҙырасаҡ һәм Ергә емергес йоғонто яһаясаҡ. Беҙҙе емергес көслө цунамиҙар көтә, тимәк, миллиондарса үлемдәрҙән ҡасып ҡотолоу мөмкин түгел. Бынан тыш, бығаса булмаған урындарҙа көслө ер тетрәүҙәре күҙәтеләсәк. Күп дәүләттәр һыу аҫтында ҡаласаҡ, ҡәҙимге тормош ҡыйраласаҡ.

Шулай ҙа ҡабат Ванганың, өсөнсө донъя һуғышы 2010 йылдың көҙөндә башланасаҡ, тигән фаразына урап ҡайтайыҡ. Әлегә өсөнсө донъя һуғышы башланмаған, әммә бөтөн донъяны глобаль көрсөк солғап алды һәм бихисап илдәрҙә, хатта бығаса имен тип һаналған илдәрҙә тәртипһеҙлектәр тыуыуға сәбәп булды. Күптәр Ванга тап ошо ваҡиғалар хаҡында һүҙ алып бара, тип фаразлай.

## Майяларҙың фаразы

Майя индеецтарының донъяға биргән ҡыҙыҡлы бүләктәренең береһе - майя календары. Майя аҡһаҡалдарының астрономик иҫәптәре иҫ китмәле аныҡ була. Мезоамериканың башҡа халыҡтары кеүек үк, майялар Йыһандың бөйөк циклдар сиктәрендә йәшәүенә ышанған. Улар бер үк ваҡытта астроном да, астролог та булған һәм яҙмышҡа тәү сиратта Ҡояш йоғонто яһай, тип уйлағандар. Беренсе Ҡояш 4008 йыл дауам иткән һәм ер тетрәүҙәр һөҙөмтәһендә емерелеп, ягуарҙар тарафынан ашала.

Икенсе Ҡояш 4010 йыл дауам итеп, ел һәм көслө циклондар менән ерләнә.

Өсөнсө Ҡояш 4081 йыл дауам итә һәм утлы ямғыр һәм ҙур вулкандарҙың кратерҙары тарафынан ҡыйратыла.

Дүртенсе Ҡояш 5026 йыл дауам итә һәм бөтөн донъяны баҫҡан һыуҙан юҡҡа сыға.

Һуңынан беҙ йәшәгән Бишенсе Ҡояш барлыҡҡа килә. Ул икенсе төрлө "Хәрәкәт Ҡояшы" тип атала. Сөнки майя индеецтарының фекеренсә, был эпохала Ерҙең киҫкен хәрәкәте күҙәтеләсәк, һөҙөмтәлә барыһы ла үләсәк. Майя календарына ярашлы, әлеге дәүеребеҙ беҙҙең эраға тиклем 3114 йылдың 12 авгусында башланып, 2012 йылдың 23 декабрендә тамамланырға тейеш икән... Майялар был даталарҙы ҡайҙан алған, уларҙы быңдай ҡатмарлы иҫәп алып барырға нимә мәжбүр иткән - һаманғаса сер булып ҡала. XXI быуаттың рациональ-интеллектуаль климатында донъяның бөтөүе тураһындағы фараздарҙы етди ҡабул итеү абруйлы түгел, шулай уҡ күрәҙәлектә иҫкелек ҡалдығы тип, уға күҙ йоморға ла мөмкин. Әммә боронғо цивилизация фараздарының бер ваҡытта ла яңылышмауы хаҡындағы дәлилдәр уйланырға мәжбүр итә. Майяларҙың фаразы ысынбарлыҡҡа ашырмы? Быны инде ваҡыт үҙе күрһәтер...

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Рауфан МОРТАЗИН, космоэнергетика магистры:** Майя календары - ул иң дөрөҫ календарь. Унда бер ай теүәл 28 көн бара. Беҙ ҡулланған Григориан календары дөрөҫ түгел, сөнки унда айҙа 28, 30, 31 көн бар, был тәбиғи ритмды боҙа. Ни өсөн тигәндә, Ай Ер тирәләй йылына 13 тапҡыр әйләнә. Унда тағы бер көн тороп ҡала, ул ваҡыттан тыш торошта, йәғни бер орбитанан икенсе орбитаға күскән ваҡыт. Майяларҙың календары 2012 йыл менән тамамлана. Әммә был донъя бөтә тигәнде аңлатмай, бары тик Ер икенсе кинлеккә күсәсәк. Унда йәшәүҙең сифаты бөтөнләй икенсе буласаҡ. Ул беҙҙең ваҡытҡа бөтөнләй тура килмәй, шуға майялар календарҙы артабан яҙмаған, тип фаразларға мөмкин.

2012 йылдың декабрендә планеталар парады була. Быны белеү бик мөһим. Сөнки ергә көслө энергетик ағым киләсәк. Уға күп кеше сыҙамаясаҡ, һуштан яҙасаҡ. Бары тик ауралары таҙа булғандар ғына был ағымға сыҙаясаҡ һәм башҡаларға ярҙам итәсәк. Сыҙау өсөн кешенең тирбәлеше юғары булырға тейеш. Ерҙең тирбәлеше 1987 йылдан башлап тиҙ темптар менән артыуын ғалимдар ҙа раҫлай. Ә кешенең тирбәлеше ерҙекенән артта ҡалһа, унда борсолоу тойғоһо барлыҡҡа килә. Хәҙер барыһында ла тиерлек борсолоу тойғоһо бар. Кеше хатта ни өсөн борсолғанын да аңлата алмай. Шулай уҡ иртән тора, эшкә китә, эшләп ҡайта, бер кем эштән ҡыумай, балалары шулай уҡ уҡырға бара, ҡайта, уйнай - барыһы ла ҡәҙимгесә кеүек, әммә борсолоу бар. Борсолоу тойғоһо һуңғараҡ ҡурҡыу тойғоһона әйләнеүе мөмкин. Кеше ҡурҡа, ләкин нимәнән ҡурҡҡанын аңламай. Быңдай борсолоу, ҡурҡыу тойғоһо менән йәшәүселәр киләсәктә арткандан-артасаҡ, 2012 йылда быңдай тойғо тағы ла көсәйәсәк. Кеше үҙенең ҡурҡыуын баҫыр, тынысланыр өсөн телевизорҙы аса, әммә унда ғына хәлдәр, донъя бөтөү тураһындағы мәғлүмәт уны тағы ла нығыраҡ ҡурҡырға мәжбүр итә. Ҡурҡыу - үҙүҙеңде яҡлау инстинктын тыуҙыра, шуға ла күптәр яҡланыулы булыуҙы ҡулына ҡорал алыуҙа ғына күрә. Уйлап ҡараһың, кешенең йәне эстән генә, уян, уян, уян, тип тылҡый, ҡуҙғыта, йән кешеләрҙе уятырға тырыша. Ләкин күптәр быны аңламай.

Һәр беребеҙҙең был донъяла 2012 йылды һәйбәт кенә үтеп китеп, аҙаҡ тағы ла матурыраҡ йәшәргә, тигән үҙ миссияһы бар. Ә беҙ Ерҙе үҙебеҙҙең уйҙарыбыҙ, ғәмәлдәребеҙ, ҡылған ҡылыҡтарыбыҙ, тойғоларыбыҙ менән нығ бысратҡанбыҙ. Ер таҙарынырға мәжбүр. Кеше лә шулай уҡ таҙарырға тейеш. Телләйбеҙме, юҡмы, Ер үҙе таҙарып, юғарыраҡ үлсәмгә күсәсәк. Кеше ышанамы, ышанмаймы - ошондай процесс бара. Шуға ла донъя бөтә тип ҡурҡырға ярамай, мөхәббәттә йәшәргә, көн һайын иртән ауранды мөхәббәт менән тултырырға һәм шул мөхәббәтте ергә ебәрергә кәрәк. Ергә ебәрһәң, ул саҡта юғары тирбәлеш килһә лә кеше аша ергә китә, борсолоу, ҡурҡыу барлыҡҡа килмәй. Кеше рәхәтләнеп, тыныслыҡта, шатланып йәшәй.

**Валентин АВАНЕСЯН, физика-математика фәндәре кандидаты:** "Донъя ахыры" йәки ахырызаман "донъя сиге" кеүек үк шартлы атама ғына. Айырма шунда: әгәр беренсеһе беҙҙең ваҡытты ҡабул итеүебеҙгә ҡағылһа, икенсеһе - киңлекте нисек ҡабул итеүебеҙгә бәйле. Кешеләрҙең бик күп меңйыллыҡтар дауамында Ерҙе тигеҙ итеп күҙ алдына килтереүе юҡҡа түгел. Улар өсөн ул тигеҙ була, йәғни ике кимәлле фекерләүгә тап килә. Фекерләү өс кимәллегә еткәс, Ерҙе түңәрәк тип күҙаллай башлайҙар. Хәҙер Кешелек эволюцияның сираттағы тупһаһы - ваҡыттың тура һыҙатлы (линейный) булыуҙан туҡтаған, уның башы һәм аҙағы бар тигән күҙаллауҙан арынған осор алдында тора. Бик күп физиктар Ғаләмдең башланғысынан, йәғни, Ҙур шартлау булырға тейеш, тигән фекерҙән баш тарта.

Ә майяларҙың һәм ольмектарҙың календарҙары - шул замандарҙағы ваҡытты ниндәйҙер ваҡиғаның һуңғы өлөшө тип ҡарауҙы боронғо документтар ғына.

Шуға күрә, "донъя бөтөүе, ахырызаман" донъяға бығаса йәшәп килгән ҡараштың ваҡыты үткәнен, икенсе, ҡатмарлыраҡ эволюцион осорҙоң килеүен раҫлай. Ерҙең сикһеҙ тарихында башланыуҙы йәки бөтөүҙе белдереүсе ваҡиғалар булмаған һәм булмаясаҡ.

**АМАТУЛЛА, диндар:** Мосолмандар ниндәйҙер күрәҙәселәргә ышанырға тейеш түгел. Ҡиәмәт хаҡында Ҡөрьәндә, хәҙистәрҙә яҙылған, беҙ фәҡәт шуларға ғына ышанабыҙ. Ысынлап уйлағанда, беҙ әле лә заман ахырында йәшәйбеҙ, әммә донъя бөтмәй әле. Ҡиәмәт көнөнә тиклем булырға тейешле билдәләр күп. Мәҫәлән, Йәжүж менән Мәжүж халҡының сығаһы, Махди (ғәҙел хаким, уны хәҙер тыуған да тиҙәр) тыуаһы, Даджал киләһе, Ергә Ғайса бәйғәмбәрҙең төшәһе бар, төрлө ауырыуҙарҙан (үлемдән башҡа) дауа табылып бөтөргә тейеш. Бынан тыш, мосолмандар менән кафырҙар араһында ҙур һуғыш булырға, һуңынан Ғайса бәйғәмбәр унда Даджалды еңергә һәм күпмелер йыл яҡшы тормош булырға тейеш. Аҙаҡ Ерҙән Ҡөрьән күтәрелә һәм бөтөн мосолмандар ҙа үлеп бөтәсәк һ.б., сөнки Ҡиәмәт көнөн мосолмандар күрмәйәсәк, уны тик кафырҙар ғына күрәсәк. Аллаһы Тәғәлә мосолмандарҙы йәлләй. Ә Ҡиәмәт көнө йома көнө таңда, мөхәррәм айының 10-да буласаҡ, тик нисәнсе йылда икәнлеген Аллаһы Тәғәлә үҙе генә белә. Был хаҡта дини китаптарҙа күп яҙылған. Шуға беҙ, мосолмандар, башҡалар кеүек Ҡиәмәт көтөп ултырмайбыҙ, Алла бойорһа, йәшәйбеҙ әле!

*Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.*

## УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Бер аң нисек итеп күп кешегә ярҙам итә ала?

**Хәҙер һеҙ күп нәмәне беләһегеҙ. Ләкин нимәнелер үҙ аллы эшләй алмайым, тигәнгә һаман ышанаһығыҙмы? Моғайын, хәҙер минең һеҙгә был донъяны нисек тиҙерәк яҡшыртыу өсөн билдәле бер аҙым тәҡдим итеүемде көтәһегеҙҙер? Һеҙ хаҡлы. Быны шулай эшләп була.**

### Донъяны нисек яҡшыртырға?

- Яҡшылап ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм әлеге ваҡытта донъяның һуғыш барған бер районын алығыҙ.
- Юғары бейеклектән һуғыш театрын күҙәтәм, тип күҙ алдына килтерегеҙ. Ошо урынды нисек итеп мөхәббәт менән - яҡтырып торған томан менән ҡаплап алыуығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына: "Тыныслыҡ, тыныслыҡ, тынныслыҡ", - тип ҡабатлағыҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа урап ҡайтығыҙ.

Был күнекмә ни бары минуттан ашыу ваҡытығыҙҙы алыр, әммә уның ярҙамында низағтың оҙайлығын һәм тәрәнлеген ҡыҫҡартырға мөмкин. Эш шунда: һеҙҙең аңығыҙҙың энергияһы башҡа кешеләрҙең, шул иҫәптән һуғышта ҡатнашыусыларҙың да аң энергияһы, иң мөһиме - Ижадсы менән бергә ҡушыла. Бынан тыш, был күнекмәне бер һеҙ генә башҡармайһығыҙ.

Тормошто яҡшыртыу өсөн, мәҫәлән, башҡа картиналарҙы күҙ алдына килтерергә мөмкин:

- Кешеләр күпләп асыҡҡан берәй төбәкте күҙ алдына килтерегеҙ ҙә, уңыш йыйыу башланыуын күҙаллағыҙ. Балалар туҡ, амбарҙар һәм келәттәр аҙыҡ-түлек менән тулы. Уйығыҙҙа ғына: "Сәләмәтлек, сәләмәтлек, сәләмәтлек", - тип ҡабатлағыҙ.
- Енәйәтселек юғары булған берәй төбәкте күҙ алдына килтерегеҙ. Мәҫәлән, ҡаланың ҡараңғы һәм ҡурҡыныс урамы, ти. Уйығыҙҙа ғына уны яҡты нур менән яҡтыртығыҙ. Тирә-яҡта яҡты һәм хәүефһеҙ, тип күҙаллағыҙ. Уйығыҙҙан ғына: "Мөхәббәт, мөхәббәт, мөхәббәт", - тип ҡабатлағыҙ.
- Хәйерселәр йәшәгән районды күҙ алдына килтерегеҙ. Ул кешеләргә нисек итеп байлыҡ яуыуын күҙаллағыҙ. Тәбиғәттең байлыҡ символы итеп Б. Франклин рәсеме төшөрөлгән 100 долларлыҡ купюраларҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Уйығыҙҙа ғына: "Байлыҡ, байлыҡ, байлыҡ", - тип ҡабатлағыҙ.

Мин һеҙгә ошо идеялар менән танышыу өсөн генә түгел, ә аңығыҙҙы донъяуи проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлтеүегеҙ өсөн рәхмәтемде белдерәм.

**Роберт СТОУН.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ӨФӨМ – БАШ ҠАЛАМ!




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**47-се һандағы кроссвордтың яуаптары:**

**Горизонталь буйынса:** 7. Боғарлаҡ. 8. Таҡтаташ. 9. Томаҡ. 11. Атака. 12. Китапхана. 15. Ҡаясай. 18. Һурнаҡ. 19. Блиндаж. 20. Борғо. 21. Лайла. 23 Ҡоролма. 26. Сабата. 27. Бағана. 31. Хореограф. 33. Аҡшам 34. Катод. 35. Сабарман. 36. Канонада.

**Вертикаль буйынса:** 1. Ҡоролтай. 2. Тараф. 3. Мантик. 4.Хазина. 5. Карта. 6. Наркоман. 10. Упҡын. 13. Радиометр. 14. Ҡуйыльтмаҡ. 16. Әлморон. 17. Раҫлама. 22. Һабаҡташ. 24. Остоҡ. 25. Анаконда. 28. Солтан. 29. Татран. 30. Талаҡ. 32. Раунд.

ХОККЕЙ

# КҮҘ ТЕЙМӘҺЕН БЕРҮК:

## йыл еңеүҙән башланды

**"Салауат Юлаев" 2011 йылды бер рәттән дүрт еңеү менән оҙатты. 30 декабрҙә Ҡаҙағстандың "Барыс" командаһын еңгәндән һуң, 2012 йылдың 12 ғинуарына хәтлем юлаевсылар үҙенсәлекле тәнәфес алғанйы.**

Бына хәҙер ул Омск ҡалаһының "Авангард" командаһы менән көс һынаша. Һәр команданың 29 матчтан һуң 63 мәрәйе бар. Тимәк, командаларҙың көсө типә-тиң.

Үҙенсәлекле тәнәфес ваҡытында ярайһы уҡ көс йыйған юлаевсылар уйынды бик ҡыҙыу, дәррәү башланы. Ҡаршы яҡ ҡапҡаға баҫым ныҡ көсәйҙе һәм тиҙҙән беренсе шайба "Авангард" ҡапҡаһына осоролдо. Иҫәпте сентябрь айында уҡ имгәнеү сәбәпле боҙ майҙанда әле күп ваҡыт уйнай алмаған Юрий Трубачев асты. Беренсе осор уртаһында Игорь Мирнов икенсе гол индерҙе. Ҡунаҡтар яуап ҡайтара алманы. "Авангард" командаһының тренерҙар штабы тайм аут алырға һәм ҡапҡасыны алмаштырырға мәжбүр булды. Әммә яңы ҡапҡасы ла ҡапҡаны шайба индереүҙән ҡотҡара алманы. Игорь Григоренко командаһы "моторы" Александр Радулов ярҙамында өсөнсө голды ҡунаҡтар ҡапҡаһына сәпәне.

Икенсе осорҙа "Авангард" хоккейсылары көслө һөжүмгә күсте, әммә Эрик Эрсберг ҡапҡаны ныҡлы йоҙаҡта тотто. Ике минутлыҡ штраф ваҡытында ла юлаевсылар Омск ҡарсығаларын ҡапҡаға яҡын юлатманы.

Өсөнсө осорҙа һәр яҡтың береһе лә уңышҡа өлгәшә алманы. Шулай итеп, уйын юлаевсылар файҙаһына 3:0 менән тамамланды.

Матчты Омск хоккейсылары "Авангард" исеме менән башлағайны, ә уйын тамамланғанда улар "ауан-гард" булып сыҡты.

Юныс ӘХМӘҘИЕВ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 ғинуар "Гипнотизер"** (В. Сигарев), комедия
**20 ғинуар "Туй"** (А. Чехов), шаярыу
**21 ғинуар "Их, кәләше лә кәләше!"** (Х. Зарипов), музыкаль комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 ғинуар "Париж егете Әлфәнис"** (Л. Вәлиев), комедия

ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә редакция коллективы бөпес һөйөнсөләүҙәренән кинәнде. Яңы йыл байрамы алдынан журналисыбыҙ Гөлнәзирәнең һәм уның тормош иптәше Арсенден тәүге балаһы - ҡыҙҙары Сафия тыуҙы.

Был һөйөнсөгә ҡыуаныс кисереп тә өлгөрмәнек, Яңы йыл төнөндә хеҙмәткәребеҙ Гүзәлдең һәм уның тормош иптәше Илшаттың шулай уҡ тәүге балаһы - улдары донъяға килеүе тураһында һөйөнсөләнеләр.

Бына әле генә тағы бер хеҙмәткәребеҙ, хәҙер инде өсөнсөгә әсәй булыусы Гүзәлдең һәм уның тормош юлдашы Тайфурҙың ҡыҙҙары донъяға килеүен хәбәр итеп, һөйөнсө алдылар. Артабыҙ, йәмәғәт! Бәләкәй генә бер коллективта бер юлы өс бала тыуһын әле!

Йәш атай-әсәйҙәрҙе ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм бәпестәренең имен-һау үҫеүен теләйбеҙ.

*Шатлыҡ һәм ҡот килтереп,*
*Беҙҙең "Киске Өфө"лә*
*Ауаҙ һалды был донъяға,*
*Бер уҡ юлы өс бала.*
*Доға ҡылып, беҙ теләйбеҙ,*
*Өс балаға өс теләк:*
*Ата-әсәләренә*
*Булһындар оло терәк!*
*Өсәһә өс тарафта,*
*Көн күрһендәр бәхет ҡороп,*
*Ирҙән илгә ирек килһен,*
*Ҡыҙ баланан килһен ырыҫ!*

**Изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

* * *

Хәйбулла районының Йәнтеш ауылында йәшәүсе ҡәҙерле кешебеҙ **Иштанов Юныс Рәхимйән** улын **60 йәшлек** күркәм юбилейы менән тәбрикләйбеҙ!

Уның һәр ваҡыттағыса егеттәрсә сая, арыҫландай ғәйрәтле, һеләүһендәй сос, типһә, тимер өҙөрлөк, баҫһа, баҡыр иҙерлек ир-уҙаман булып ҡалыуын теләйбеҙ. Һәр яҡтан да өлгәр, бөтмәр, ярҙамсыл затыбыҙҙың был донъяла булыуына ҡыуанабыҙ.

**Ҡатыны, балалары, ейән-ейәнсәрҙәре, туғандары.**

Салауат районының Ишембай ауылында йәшәүсе синыфташыбыҙ Дәүләтшин Филүс Фларит улының

**әсәһе**

вафат булып ҡалыуы айҡанлы, ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ. Ауыр тупраҡтары еңел булһын мәрхүмәнең.

**Синыфташтары.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# РУХЫ БАРҘЫҢ ҒЫНА...

## моңо бар

**Яңы йыл алдынан Башҡортостан юлдаш телевидениеһы ойоштороған "Башҡорт йыры" фестиваленә йомғаҡ яһалды. Тәүге тапҡыр уҙғарылған конкурста 100-гә яҡын профессиональ йырсы ҡатнашырға теләк белдергән. Йыл дауамында барған бәйгенең финалына 11 йырсы үткән. Еңеүселәрҙе фестивалде йомғаҡлау кисәһендә - Гала-концертта ҡотланылар. Финалсыларҙың һәр береһенә "Башҡорт йыры" телевизион премияһы тапшырылды. Ә гран-приға Айгиз Ғиззәтуллин менән Айгөл Һағынбаева лайыҡ булды. "Башҡорт йыры" тамашасылар күңелендә ниндәй хис-тойғолар ҡалдырҙы, йәш профессиональ йырсыларҙың талант кимәле ниндәй баһаға лайыҡ? Был турала артабанғы һандарыбыҙҙа төплөрәк һөйләшеүҙәр ойоштororолор, моғайын. Ни тиһәң дә, "Башҡорт йыры"ның телевидение тормошонда уникаль проект булыуын берәү ҙә инҡар итмәҫ. Ә әлегә фестивалдең Гала-концерты хаҡында ҡайһы бер фекерҙәр.**




**Римма ЮЛДАШБАЕВА, Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессоры, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре:** "Башҡорт йыры" телевизион конкурсы яҡшы ғына башланып китте. Унда ҡатнашҡан профессиональ йырсыларҙың барыһы ла иң тәүҙә халыҡ йырҙарын башҡара белеү оҫталығын күрһәтте. Шуныһы менән проект үҙенсәлекле лә инде. Йәштәрҙең халыҡ йырҙарын башҡарыу кимәле бик үк шәптән түгел икәнен конкурс тағы бер тапҡыр раҫланы. Башҡорт йырын йыр иткән моң юҡ күптәрҙә. Ә моң бары тик рухтан килә. Башҡорт борон бик рухлы булған бит. Ә йәштәрҙә ана шул рух самалы. Вокаль яҡтан дөрөҫ йырлаһалар ҙа, рух самалы булыу арҡаһында халыҡ йырын еренә еткереп йырлай алмайҙар - бөтөн хәҡиҡәт шунда.

Башҡорт йыры, тибеҙ икән, ул мотлаҡ халыҡ көйө, халыҡ йыры тип аңлайбыҙ беҙ барыбыҙ ҙа. Шуға ла конкурс ике турҙан тороуға, уның икенсе туры эстрада йырҙарына бағышланыуға ҡарамаҫтан, Гала-концертта тамашасы конкурста ҡатнашыусының тап халыҡ йырын башҡарыуын ишетергә тейеш ине. Әммә улай килеп сыҡманы. Концертты ойоштороусылар проекттың маҡсатын аңламаныммы, юғиһә? Тамаша тотошлайы менән эстрада йырҙарынан торҙо тиерлек. Әммә шундай мәртәбәле конкурста еңеп, финалға сыҡҡан ҡатнашыусының ауыҙынан яңғыраған эстрада йырҙарында ла бит халыҡ көйө ишетелергә тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, "Башҡорт йыры"нда башҡорт йырын ишетмәнек. Быйыл буласаҡ конкурста был хата иҫәпкә алыныр, моғайын.

**Луиза ФАРХШАТОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:** "Башҡорт йыры" конкурсы кисә генә барлыҡҡа килгән идея түгел. Ул проектты булдырыу уйы күптән бар ине. Төрлө сәбәптәр арҡаһында уны башлап ебәреү мөмкинлеге генә булманы. Шуға күрә уның урынына "Гәлсәр һандуғас" проекты асып ебәргәйнек замаһында. "Гәлсәр һандуғас" эфирҙан алынғас, тележурналисыбыҙ Рита Өмөтбаева күптәнге хыялыбыҙҙы тормошҡа ашырыуға күп көс һалды. Уның ныҡышмалылығы, ҡыйыулығы арҡаһында конкурсты ойоштороу кимәле юғары булды. Конкурсҡа ғәзел, профессиональ жюриҙың йәлеп ителеүен билдәләргә кәрәк. Быны ниммәнән сығып әйтәм: Гран-при алыусының икеһе лә Ҡаҙанда уҡыған. Уҙ уҡыусынды түгел, ә Башҡортостандан булһалар ҙа, ситтә уҡып ҡайтҡандарҙы еңеүсе итеү өсөн дә ҙур ҡыйыулыҡ кәрәк бит. Тимәк, ҡатнашыусыларҙың ҡайҙа белем алыуы түгел, ә оҫталыҡ кимәле баһаланған.

Гала-концертҡа килгәндә, әлбиттә, тәүге конкурс, тип, етешһеҙ яҡтарын аҡларға булыр ине. Әммә ҡатнашыусыларҙың бында ла халыҡ йырҙары менән һынау тотмауын бер нисек тә аҡлап булмай. Исмаһам, сәхнәгә оҫталыҡ өлгөһө күрһәтер өсөн сыҡҡан йырсылар Флүрә Килдейәрова, Әлфиә Юлсурина, Иҙрис Ғәзиев, Айҙар Ғәлимовтарҙан берәр халыҡ йыры башҡартырға ине. Ярай әле, Абдулла ағай Солтановты саҡырғандар. Уның сығышы аяғүрә баҫып ҡаршы алынды, концерттың иң бәҫле мәле булды. Тағы шул: былдай яуаплы, ҙур конкурсы ойоштороу, үткәреү өсөн бер телевидениеның ғына көсө етмәй. Бында Мәҙәниәт министрлығының ҡатнашлығы ла кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Башҡорт йыры"ның Гала-концертын Яңы йыл байрамдары көндәрендә бөтөн республика халҡы БСТ каналы аша тамаша ҡылды. Дөрөҫөн әйткәндә, БСТ-ның яңы проекттары араһында "Башҡорт йыры" менән "Байыҡ"ҡа етеүсе башҡа программалар булманы ла шикелле инде. Шуға ла "Башҡорт йыры"на ҡарата ҡайһы бер теләктәр әйтелеүгә ҡарамаҫтан, был уның уникаллеген бер ҙә кәметмәй. Проекттарҙың авторы Рита Өмөтбаеваға бары тик һоҡланыу һәм рәхмәт һүҙҙәре генә әйтергә була.**

**Мөнир ИҠСАНОВ әҙерләне.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

# ЭСӘК-ҠАРЫНДАН БӘЛЕШ



**Бәлеш әҙерләү өсөн 500 грамм он, 3/4 стакан һөт, 2 ҡалаҡ һары май, 1 йомортҡа, 0,5 ҡалаҡ аҡ май, 700 грамм эсәк-ҡарын, 700 грамм картуф йәки 300 грамм ярма, 100 грамм һуған, 1 ҡалаҡ тоҙ, борос, лавр япрағы алына.**

Һыйыр йәки ат эсәктәрен һәм ҡартаһын ныҡлап йыуығыҙ, 30-40 сантиметрлыҡ киҫәктәргә ҡырҡығыҙ. Һәр киҫәген тиҫкәрегә әйләндерегеҙ (сыбыҡ йәки нәҙек уҡлау менән). Сайҡатып, һыуын алмаштыра-алмаштыра, һыуыҡ һыуҙа 8-12 сәғәт ебетегеҙ. Һуңынан эҫе һыу менән бешереп, эсәктәрҙе лайланан таҙартығыҙ ҙа, бер нисә тапҡыр сайҡатығыҙ. Әҙерләнгән эсәктәрҙе 1 -1,5 сантиметр киңлегендә турағыҙ.

Йомшаҡ ҡамыр баҫығыҙ. Эсәктәргә туралған һуған, картуф йәки ярмалар (алдан бер аҙ бешереп), тоҙ, борос ҡушығыҙ. Ҡамырҙы икегә бүлегеҙ, бер бүлеме (бәлештең аҫты) ҙурыраҡ булырға тейеш. Ҡамырҙың ҙур киҫәген 5-7 мм ҡалынлығында йәйегеҙ һәм майланған, онло табаға һалығыҙ. Ҡамыр өҫтөнә әҙер фаршты матурлап түшәп һалығыҙ ҙа, өҫтөн икенсе йәймә менән ҡаплағыҙ һәм аҫтағы ҡамыр ситтәре менән йәбештереп үрегеҙ. Бәлештең өҫтөндәге ҡамырҙың уртаһынан тишегеҙ (бешкәндә эсендәге быу сыҡһын өсөн). Бәлеште духовкала (200 $^{0}$С) йәки мейестә 30-40 минут бешерегеҙ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АТАЙ - ЕҘНӘ...

## инәй - ҡаҙна

Эшең кире китһә, эше алға барғанға кәңәш ит.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше ҡайһы саҡта башҡаларға үпкә белдерә? Уның юмор тойғоһон һәм...бәхетһеҙ булыу хоҡуғын шик аҫтына ҡуйғанда.

**(Синклер Льюис).**

Бәхет эҙләүсе кеше өйө барлығын белгән, әммә ул өйҙә таба алмай ҡаңғырған иҫәреккә оҡшаш.

**(Вольтер).**

Беҙ бәхет тип атаған нәмә — оҙаҡ ваҡыт тыйылып торған ихтыяжды ҡәндырыу һөҙөмтәһендә килеп тыуған тойғо ул.

**(Зигмунд Фрейд).**

Үҙенең күңел ихтыяжына тап килгән шарттарҙа йәшәүсе кеше, әлбиттә, бәхетле, әммә үҙ ихтыяжын теләнә ниндәй шарттарға яраҡлаштыра белгәндәр тағы ла бәхетлерәк.

**(Дэвид Юм).**

Кем үҙен бәхетһеҙмен тип атай, ул ысынлап та бәхетһеҙ.

**(Клод Гельвеций).**

Ҡасандыр бәхетле булған урынға янынан әйләнеп ҡайтма, ул һинең хәтерҙә тере хәтирә булып ҡалһын.

**(Агата Кристи).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Ауылдан ситтә ултырған бер бәләкәй йортта бер дәрүиш йәшәгән. Халыҡ уны аҡылы һәм үҙенең йәшәү рәүешенә тоғролого, нәфселе булмауы өсөн хөрмәт иткән. Бына бер саҡ был дәрүиштең йорто янып киткән. Ауыл халҡы утты шәйләп, йүгереп килеп, өй эсендә булған ҡайһы бер әйберҙәрҙе сығара башлаған. Ут һүнмәгәс, биҙрәләп һыу ташып, утҡа һибергә тотонғандар. Әммә ошо мәлдә халыҡты бер нәмә аптырауға һалған: дәрүиш утты һүндерергә ярҙам итеү урынына, ауылдаштары ҡотҡарып алып ҡалған әйберҙәрҙе утҡа ташлай торған.**

**Бына ут һүнгән һәм кешеләр ҙә йылғанан һыу ташыуҙы туҡтатҡан. Шул саҡ ҡотмәгәндә ҡойоп ямғыр яуып ебәргән. Ошо мәлдә халыҡты тағы ла аптыратып, дәрүиш биҙрә алып, йылғанан һыу ташып, йорто урынында бысҡып ятҡан утҡа һыу һибә башлаған. Кешеләр нимә уйларға ла белмәй, аптырап баҫып торған-торған да, дәрүиштән ниңә былай итә икәнен һораған-дар.**

**- Мин бар нәмәгә шатланам, - тигән дәрүиш. - Ут барлыҡҡа килә икән, мин шатланам һәм уға янырға ярҙам итәм. Ямғыр яуа икән, мин уға ла шатмын һәм уға ла яуырға ярҙам итәм..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 13 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5213
Заказ 100